# СБОРНИК 50 ТЕКСТОВ НА БАШКИРСКОМ ЯЗЫКЕ
# ПРОЕКТ «ТУГАН ЯК – АТЛАС МАЛОЙ РОДИНЫ»

## 1. Суфия мәсете

Башҡортостандың үҙенең Тадж-Махалы бар. 2008 йылда Стәрлетамаҡ районы Кантюковка ауылында “Суфия” йәки Кантюков мәсете үҙ ишектәрен аса һәм республиканың төп архитектура ынйыларының береһенә әйләнә.

Ун биш йылдан ашыу мәсет диндарҙарҙы, никахлашыусы йәштәрҙе, хаж ҡылыусыларҙы, башҡа ҡалаларҙан килеүсе туристарҙы үҙенең матурлығы менән ҡыуандыра.

Ауыл халҡының үтенесе буйынса, ошо ауылда тыуған, ул ваҡытта “Таттрансгаздың” генераль директоры булған Рәфҡәт Кантюков мәсет төҙөүҙе финанслай. Бағыусы мәсеткә үҙенең әсәһенең исемен бирә.

“Суфия” мәсете үҙендә мәрмәр менән көпләнгән, алтын һәм мозаика менән биҙәлгән көнсығыш мотивтарының үрелешен берләштерә. Баҫҡыстар һәм цоколь өсөн серпентинит йәки йыланташ материалы ҡулланылған. Мәсеттең эске йыһаздары ла таң ҡалдыра: ике төҫтәге Урал мәрмәре, чех гәлсәр аҫылмалы шәмдәлдәре һәм яҡтыртҡыстары, Италия мозаикаһы, заказ менән туҡылған келәмдәр. Диуарҙарҙа ғәрәп телендә Ҡөрьәндән өҙөктәр килтерелгән.

“Суфияның” манараһы һәм көмбәҙҙәре алтын кеүек ялтырап, алыҫтан үҙенә иғтибарҙы йәлеп итеп тора. Мәсет ҙур булмаған яһалма һыу яҡтылының ярында урынлашҡан. Тышҡы биҙәлешендә художестволы яҡтыртыу ҡулланыла.

## 2. Столяровка һәм туйындырыусы картуфҡа һәйкәл

Әгәр һеҙҙе ғәҙәти булмаған һәйкәлдәр ҡыҙыҡһындыра икән, һеҙ мотлаҡ Столяровкаға барырға тейешһегеҙ!

Революцияға тиклем барлыҡҡа килгән был ауыл республикала ҡыҙыҡлы туристик маршруттарҙың береһе булараҡ популярлыҡ яулай. Столяровка Башҡортостандың Мәләүез районында, Салауат ҡалаһынан алыҫ түгел, Барсы йылғаһы ярында урынлашҡан. Уға хәҙер 180 йылдан ашыу! Быуат башында бында бары тик 1 генә кеше теркәлгән булған! Ауыл нисек һаҡланып ҡалған һәм йәшәүен дауам итә?

Ауылға нигеҙ һалыусыларҙың береһе-Федор Кошелевтың бүләһе,” Газпром добыча Оренбург” ЯСЙ-нең генераль директоры Сергей Иванович Иванов бәләкәй Ватаны тарихына битараф ҡала алмай һәм Сторяровка ауылын тергеҙергә ҡарар итә. 2006 йылда ауылда төҙөлөш эштәре башлана. Бында яңынан йорттар һәм ғибәҙәтхана ҡалҡып сыға, Марьин шишмәһе тергеҙелә. Яңы сиркәү төҙөлә. Бөйөк Ватан һуғышы еңеүселәренә мемориал ҡуйыла. Уйлап ҡына ҡарағыҙ: төҙөлөш эштәре башланғанға тиклем ауылда 5 кенә йорт ҡалған була, ә бөгөн унда 50 хужалыҡ иҫәпләнә!

Әйткәндәй, һүҙебеҙ ғәҙәти булмаған урындар тураһында. Столяровканың Звездная урамында уникаль объект урынлашҡан. Ул-картуфҡа ҡуйылған ысын һәйкәл! Постаментта шулай тип яҙылып та ҡуйылған: ”Туйындырыусы картуфҡа”. Һуғыш йылдарында ауыл ошо ризыҡ арҡаһында ғына йәшәй. Һәйкәл ошолай сағылдырылған: ҙур ғына бүлбелә картуф күҙҙәре. Иҫтә ҡалырлыҡ фотолар эшләү мөмкинселеге туристарҙы ҡыуандыра.

# 3. Бөрө ҡәлғә-ҡалаһы

Башҡортостанға килеп тә иҫ китмәле Бөрө ҡалаһын барып күрмәү хилаф булыр ине! Бөрө республикала икенсе ҡәлғә-кала тип иҫәпләнә. Уға сауҙагәр Челядин XVII быуатта уҡ нигеҙ һала. Ҡайһы бер сығанаҡтар ҡаланың Өфөнән дә олораҡ булыуын фаразлай.

Шуныһы ҡыҙыҡлы, ҡала атамаһы «бүре һыуы» тигәндән алынған, Бөрө йылғаһы-балыҡсыларҙың яратҡан урыны. Башҡорт ихтилалы ваҡытында яндырылған Архангельский ауылы урынында төҙөлгәне билдәле.

Ҡала буйлап йөрөү-үҙе бер кинәнес, сөнки бында тарихи архитектура ҡомартҡылары һаҡланып ҡалған. Үҙ аэродромы һәм рельсһыҙ тимер юл вокзалы булған бәләкәй генә ҡаланың тарихын тағы ҡайҙа ишетер инегеҙ? Был Бөрө тураһында факттарҙың бик аҙ өлөшө генә.

Иң яҡшы һаҡланған бина-сауҙагәр Морозованың йорто. Унда хатта кафель мейес тә һаҡланған тип әйтәләр. Бина классицизм стилендә эшләнгән. Һуғыш ваҡытында бында типография урынлашҡан булған.

Архитектураның «торттағы сейәһе» тип элекке Реаль училище бинаһын атарға мөмкин. Хәҙер бында Өфө фән һәм технологиялар университеты филиалы урынлашҡан. Университет ихатаһында башҡорт яҙыусыһы Һәҙиә Дәүләтшинаға һәйкәл ҡуйылған.

«Соколок» паркы-ашыҡмай ғына йәйәү йөрөү өсөн иң уңайлы урын. Парк революция көрәшселәренә арналған, шулай ҙа урындағы ҡулланышта тап беренсе атамаһы тамыр йәйгән. Бында «Граждандар һуғышы йылдарында һәләк булған Бөрө халҡына», «Революция көрәшселәренә» мемориалдары ҡуйылған. Бынан тыш, күҙәтеү майҙансыҡтарынан Ағиҙел йылғаһына иҫ киткес күренеш асыла!

Ҡалаға матур күренеште Галкина тауынан күрергә мөмкин.Бында Михайло-Архангел ғибәҙәтханаһы төҙөлгән. Тап ошо урында ҡасандыр ағастан Бөрө ҡәлғәһе барлыҡҡа килгән ҡалаға башланғыс биргән.

Ҡаланың үҙәгендә һеҙ уға нигеҙ һалыусы сауҙагәр һәйкәлен күрерһегеҙ.

Автовокзалда Емельян Пугачев ихтилалын хәтерләткән һәйкәлде-ҙур ташты күрергә була.

Әйткәндәй, Бөрөлә бай сауҙагәрҙәр аҡсаһына төҙөлгән вокзал бар, уға тимер юл үткәрелмәгән. Был тарихи бинала хәҙер 1-се һанлы мәктәп урынлашҡан.

Һуғыштан һуңғы осорҙа ҡаланың үҙенең аэродромы булыуын бик аҙҙар ғына белә. Уны 1955 йылда төҙөгәндәр. Еңел авиация самолеттары Стәрлетамаҡҡа, Өфөгә һәм башҡа ерҙәргә оса. Аэродром 80-се йылдарға тиклем сервис хеҙмәтләндереү һәм яғыулыҡ тултырыу пункты сифатында файҙаланыла, Башҡортостандың баш ҡалаһынан ауыл хужалығы самолеттарын ҡабул итә. Һуңынан авиабәйләнеш отошһоҙ булыу сәбәпле, самолеттарҙы автобустар алмаштыра. Осиновка ауылында самолеттар тороу полигоны әле лә һаҡланған. Осоу-ултырыу һыҙаты аша юл үтә.

Әгәр йәнле диалог һәм күберәк тарихи факттар белергә теләһәгеҙ, Бөрө тарихты өйрәнеү музейына барыу мөмкинлеген ҡулдан ысҡындырмағыҙ. Унда

ҡала тураһында ҙур һөйөү менән һөйләнелгән ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр ишетерһегеҙ.

## 4. Тимер юлһыҙ вокзал

Император Александр II идара иткән осорҙа төҙөлгән тимер юл вокзалы Бөрөнөң тарихи ҡомартҡыларының береһе булып тора.

Бөрө бик уңышлы, бик бай сауҙагәрҙәр ҡалаһы була. Ағиҙел йылғаһы буйлап караптар бәйләнеше булғанға күрә бында сауҙа эше яҡшы бара. Әлбиттә, йүнсел сауҙагәрҙәр ҡалаға тимер юл тармағы кәрәклеген дә аңлайҙар. Шуға күрә, XIX быуат аҙағында, улар үҙ аҡсаһына тимер юл вокзалы төҙөтәләр.

Бөрөнө башҡа ҡалалар менән бәйләү, көнсығышҡа юл һалыу һәм, шулай итеп, сауҙа әйләнешен һәм табышты арттырыу өсөн «Өфө – Пермь» меридиональ тимер юлын һалыу планлаштырыла. Проект идея ғына булып, ә вокзал рельстарһыҙ ҡала.

Иң мөһиме - үткәндәрҙең рухын һаҡлап ҡалған ике ҡатлы матур вокзал бинаһы бөгөнгө көнгә тиклем һаҡланған! Вокзал Курбатов урамы, 59 адресы буйынса урынлашҡан. Элек бында Коммерция училищеһы булған. Хәҙер унда 1-се һанлы дөйөм белем биреү мәктәбе урынлашҡан.

## 5. Белорет ҡалаһында кәйләгә һәйкәл

Өфө яғынан килеп, Белорет ҡалаһына ингән ерҙә, ҡалҡыулыҡта кәйләгә ҡуйылған ун метрлыҡ һәйкәл бар. Был уникаль объект XX быуаттың 70-се йылдарында барлыҡҡа килгән. Ергә сәнселгән ҙур кәйлә тимер-бетондан эшләнгән. Ул «Белорет-Шишмә» тимер юлы төҙөүселәренә һәм хеҙмәткә һәйкәлде символлаштыра.

Әйткәндәй, юлдың үҙен «икенсе Бам», «башҡорт Бамы» тип тә атайҙар. Аналогияһы буйына Себерҙәге легендар тимер юлға оҡшаш – уның оҙонлоғо 203 саҡрым тәшкил итә.

Тимер юл төҙөлөшөндә Өфө авиация институты студенттары ҡатнаша. Кәйлә һәйкәлен йәмәғәт башланғысында төҙөгәндәр. Был иҫтәлекле урындың проектын Өфө авиация институтының инженер психологияһы һәм педагогикаһы ассистенты, рәссам-дизайнер Игорь Полев әҙерләгән. Ул эш ҡоралдарының йыш ҡына шиғриләштерелеүен иҫенә төшөрә, мәҫәлән, кенәз Олегтың Батша-ҡаланың ҡапҡаһына ҡаҙаҡлаған ҡалҡаны, йәки батырҙар тураһында эпик йыр геройы Микула Селяниновичтың тауға ташлаған һуҡаһы...

Поезд пассажирҙары хеҙмәткә бағышланған һәйкәлде күрә алһын өсөн кәйләне трассала, ҡалҡыу урында төҙөү идеяһы килә.

Кәйлә һабының кире яғында «Төҙөүсе – комсомол» һүҙҙәре яҙылған. Студенттар үҙҙәренең "автографтарын" ҡалдырған: кәйлә алдындағы бетон майҙансыҡта уларҙың ҡул эҙҙәрен күрерһегеҙ.

# 6. "Өфө муйынсағы»

Өфө ярымутрауы уникаль. Ул ғәйәт ҙур урман массивы сылбыры менән уратып алынған. Уны ике ҙур йылға-Ағиҙел һәм Өфө йыуа. Саф һауала оҙаҡ йәйәү йөрөү өсөн миллионлы ҡаланың потенциалы ҙур: үҙе бик йәшел, шау-шыулы автомобиль юлдарынан һәм көндәлек ығы-зығынан алыҫ.

2021 йылда ҡалала “Өфө муйынсағы“ проекты башлап ебәрелде. Ярымутрау ҡатын-ҡыҙҙарҙың биҙәүесенә оҡшаған, айырым маршруттар-уның мәрйендәре, тоташтырыусы ептәре-Ағиҙел һәм Өфө йылғалары, шуға күрә лә проект шундай метафорик атама алған. Ҡаланың урман массивында һуҡмаҡтар күп, ләкин улар оҙаҡ ҡына ваҡыт велосипедта йөрөү өсөн ҡулланылмаған булғандар. Бөтә һуҡмаҡтарҙы ҙур селтәргә берләштереп, Өфө ярымутрауы буйлап ҡулса маршруты эшләү идеяһы барлыҡҡа килә.

Проект командаһына архитектор Адель Әхмәҙуллина, архитектор Семен Кучеров, урбанист Әнүәр Байков, эколог Фәрит Абдуллин, айтишник Юрий Глущенко һәм проект методологы Святослав Муруновтар инде. Урындағы активистар командаһы ҡала хакимиәтенән грант отто һәм «Смарт парк» Автономиялы Коммерцияға ҡарамаған Ойошма ярҙамында һуҡмаҡ яландарының береһендә ғаилә фестивале үткәрҙе. «Смарт парк» директоры Мөнир Миңлебаев инициативаһы буйынса Республика башлығы гранты яуланылды. Шулай итеп, команда «Өфө муйынсағы» проектын башлау өсөн ресурстар ала һәм экоһуҡмаҡтың «нуль саҡрымы» барлыҡҡа килә. Ул Шәфиев урамынан башлана һәм хәҙер бик популяр маршрут.

Һуңынан был проект баш ҡаланың 450 йыллыҡ юбилейына әҙерлек планына өҫтәлде. Ҡаланың район хакимиәттәре һуҡмаҡтарҙы төҙөкләндерә, ә команда ағзалары был этапта уларға консультация бирә.

«Өфө муйынсағы» маршруттарында күҙәтеү, уйын һәм спорт майҙансыҡтары, велосипед юлдары һәм навигация күрһәткестәре бар. Йәйәү йөрөп сыҡҡандан һуң теләүселәр ағас эскәмйәләрҙә ултырып ял итә ала.

Хәҙер "Өфө муйынсағында" һигеҙ экоһуҡмаҡ – Воронки, Калинка, Дежневка, Аврора ынйыһы, Яҡутов паркы, Өфө йүкәләре, Аҡбуҙат һуҡмағы, Урмансылар паркы иҫәпләнә. Бәләкәй түңәрәктең оҙонлоғо 70 саҡрым тәшкил итә. Тағы өс һуҡмаҡ тамамланыу стадияһында.

## 7. «Башҡорт аты» фестивале

Йылҡысылыҡ, ҡымыҙ эшләү һәм халыҡ кәсептәре... Һәр йыл һайын август айында Башҡортостан Республикаһында башҡорт тоҡомло аттарҙың халыҡ-ара фестивале үтә. Ул «Башҡорт аты» тип атала.

Фестиваль изге йола, ата-бабаларға хөрмәт күрһәтеү булараҡ нығына бара. Унын төп маҡсаты-башҡорт аты тоҡомон һаҡлау. Был спорт сараһы ғына түгел, мәҙәни сара ла. Шулай уҡ туристар өсөн бик яҡшы маршрут та - ат парадынан, ярыштарҙан тыш, бында ҡымыҙ әҙерләү процесын күҙәтергә һәм шифалы эсемлекте тәмләп ҡарарға мөмкин. «Башҡорт аты» республиканың Баймаҡ районында, Ирәндек һырты һәм Граф күле янында уҙғарыла. Бындағы иҫ киткес матур тәбиғәт күренештәренән ләззәт алыу мөмкинселеге бар.

«Башҡорт аты» фестивалендә көслө, ғорур башҡорт аттары, күмәк ат ярыштарында ҡатнашып, «үҙҙәрен күрһәтеү» мөмкинлегенә эйә булалар. Фестивалдең айырым майҙансыҡтарында башҡорт тоҡомло аттарҙың һанын һаҡлау мәсьәләләренә арналған эшлекле программалар үткәрелә.

Башҡорт аттары тоҡомо урындағы урман һәм дала тибындағы тоҡомдарҙан башланғыс ала. Киң маңлайлы, тура профилле, тәпәш һаурылы (муйын менән бил араһындағы ҡалҡып торған өлөш) башҡорт аттары XVII-XVIII быуаттарҙа уҡ таралған булған. Был тоҡомло аттар ауыл хужалығында ҡулланылған булһа ла, элекке замандарҙа башҡорт тройкалары 120-140 саҡрым араны үтеп, үҙҙәренең сыҙамлығы менән таң ҡалдырғандар.

Аттың башҡорт риүәйәттәрендә, атап әйткәндә, башҡорт эпосы «Урал батырҙа» ысын мәғәнәһендә сакраль, йәғни, хөрәфәти әһәмиәте бар. Эпоста айырым көскә эйә ҡанатлы Аҡбуҙат мөһим роль уйнай.

Башҡорт тоҡомло аттарына көнкүрештә тәғәйенләнеше буйынса-һөтөнән ҡымыҙ әҙерләү йәки хәрби походтарҙа йөрөү сараһы булараҡ ҡына түгел, ә кешенең тоғро юлдашы символы булараҡ та ҡарағандар.

«Башҡорт аты " фестиваленең программаһы бик тамашалы һәм иғтибарға лайыҡ: бында йыл һайын йылҡысылар, һөнәрселәр, спортсылар, фольклорсылар һәм халыҡ ижады коллективтары йыйыла. Фестиваль үткәрелгән урын-Башҡортостандың иң көнсығыш һырттарының береһе-үҙенең тәбиғи матурлығы менән таң ҡалдыра һәм сәйәхәт итеү өсөн бик яҡшы маршрут була ала. Ирәндек битләүҙәрендә бер нисә йылға инеш ала, ә һырт үҙе Уралдың Йәшмә билбауына ҡарай. Был ерҙәр ятҡылыҡтарға ғына түгел, тарихҡа ла бай: тап бында боронғо тораҡтар һәм ҡаласыҡтар буйлап мауыҡтырғыс сәйәхәт яһарға мөмкин.

# 8. «Сауҙагәр 2.0»-ҡунаҡсыллыҡ фестивале

Стәрлетамаҡта, хәҙерге Салауат Юлаев исемендәге скверҙа, XX быуат башына тиклем үк ҙур сауҙагәрҙәр йәрминкәләре үткәрелгән булған. Был майҙан ҡасандыр өйәҙ ҡалаһы булған Стәрленең тарихи урыны тип һанала һәм йыл һайын август айында илдең төрлө төбәктәренән килгән ҡунаҡтарҙы һәм туристарҙы «Сауҙагәр 2.0 » халыҡ-ара фестивале менән ҡаршы ала. Әгәр һеҙ революцияға тиклемге ҡала мөхитен тойорға теләһәгеҙ, урындағы ҡунаҡсыллыҡ фестиваленә барырға тейешһегеҙ. Сөнки стәрлетамаҡтар уны республиканың иң рухи байрамы тип атауҙары ла юҡҡа түгел.

Профессиональ декораторҙар майҙанда бер-нисә көнгә элекке өйәҙ ҡалаһын тергеҙә. Бында сауҙагәрҙәр һәм уларҙың ҡатындары менән ысын йәрминкә үтә. Ҡунаҡтарҙы боронғо замандарҙағынан бер ҙә кәм булмаған күңел асыу байрамдары көтә! Хәҙерге ҡала урамдарында урыҫ мейесе һәм дәртле мәрәкәселәрҙе йыш күрмәйһең, шуға күрә «Купец 2.0» фестивале уҙған дәүергә “алып ҡайта” ала.

Ғәҙәттәгесә, ҡунаҡтарҙы милли кейемдәрҙә парадта үтеүселәр сәләмләй. Кисен Мәскәү, Өфө, Стәрлетамаҡ һәм башҡа илдәрҙең иң яҡшы артистарынан халыҡ бейеүҙәре, театрлаштырылған тамашалар һәм бард йырҙары менән сағыу концерт көтә. Бынан тыш, фестивалдә бөтә илдән оҫталарҙың һөнәрселек тауарҙарын һатып алырға мөмкин. Өс йөҙҙән ашыу оҫта үҙ һатып алыусыларын көтә! Ә ҡаланың иң яҡшы рестораторҙары донъя халыҡтарының нәзәкәтле ризыҡтары менән һис шикһеҙ ҡыуандырасаҡ.

Шулай уҡ «Сауҙагәр 2.0» фестивале Стәрлетамаҡтың иҫтәлекле урындары буйлап экскурсия яһау, «Торатау» геопаркында булыу һәм легендар шихандарҙы үҙ күҙҙәре менән күреү мөмкинлеген бирә: ойоштороусылар тарафынан туристар өсөн трансфер ҡаралған.

Төрлө йәштәге туристар фестиваль майҙансыҡтарында үҙҙәренә шөғөл таба аласаҡ: бында балалар һәм йәштәр өсөн дә, шулай уҡ өлкәндәр өсөн дә ял ойошторолған.

Ҡунаҡсыллыҡ фестивале Стәрлетамаҡта тәүге тапҡыр 2021 йылда старт алды. Ә киләһе 2022 йылда инде “RussianEvent Awards”туризм өлкәһендәге абруйлы милли премияла “Тарихи йүнәлештәге иң яҡшы туристик ваҡиға” номинацияһында гран-при яуланы. Шулай итеп, “Сауҙагәр 2.0” фестивале “ Илдең милли ваҡиғалары календарына” инде. 2023 йылда стәрлеләр илдең билдәле ТОП-65 туристик ваҡиғаларын тулыландырҙы.

# 9. Турахан кәшәнәһе

Турахан кәшәнәһе Алтын Урҙа осороноң иң һаҡланып ҡалған мосолман ҡомартҡыһы булараҡ билдәле, һәм уны тарих менән ҡыҙыҡһынған һәр кем килеп күрергә тейеш. Турахандың ҡәберлеге XIV-XV быуаттарҙа төҙөлгән. Ул республиканың Шишмә районындағы Түбәнге Тирмә ауылы янында урынлашҡан.

Шунышы ҡыҙыҡ, һәйкәлде икенсе төрлө кәшәнә тип атайҙар, был «көл йорто» тигәнде аңлата. Болғар архитектураһы ҡомартҡыһы урынлашҡан ҡалҡыулыҡ үҙе тәбиғи үҙенсәлек булып тора – бында ете быуатлыҡ башҡорт далаһы ҡатламы һаҡланған! Турахан мавзолейына һарҡыу һуҡмаҡ алып бара, маршруттың оҙонлоғо яҡынса алты йөҙ метр тәшкил итә, ә айырым участкаларҙа туҡтап ял итеп алыу өсөн эскәмйәләр ҡуйылған.

Мавзолей тәбиғи таштан, нигеҙе тупаҫ таштан төҙөлгән. Ҡалынлығы бер метр, эзбизташ эретмәһенә һалынған. Мавзолей көмбәҙе һаҡланған. Бинаның бейеклеге алты метрҙан саҡ ҡына күберәк. Ҡоролманың өҫкө өлөшө еңелерәк таштан эшләнгән. Мавзолей портал-көмбәҙ формаһында, заманса рәшәткә менән уратып алынған, йоҙаҡҡа бикләнә торған ҡапҡа ҡуйылған.

2024 йылда боронғо объекттан алыҫ түгел Евразия күсмә цивилизациялар музейының визит-үҙәге асыла. Унда Остромир Евангелиеһының күсермәләре һәм Ғосман Ҡөрьәненең берҙән-бер алтын ҡулъяҙма күсермәһе һаҡлана. Мәғлүмәт стендтары һәм макеттары бар. Бында Башҡортостанда исламдың барлыҡҡа килеүенә ҡағылышлы артефакттар урынлаштырыу күҙаллана. Динде таратыусы имам Хөсәйен-бәк ҡәбере лә бында, Шишмә районында урынлашҡан.

Турахандың үҙенә килгәндә, был кешенең шәхесе сер булып ҡала. Ул юғары ҡатламға ҡараған һәм донъяуи тормош алып барған, ислам динен ҡабул иткән беренсе хан булған тигән фараз бар. Өсөнсө версия буйынса, был кеше Сыңғыҙхан тоҡомонан, Күсемхандың туғаны булған һәм Слаҡ йылғаһы буйында Турахан һарайын төҙөгән. Дүртенсе фараз Турахан шәхесе уйлап табылған, уның исеме титул ғына тип раҫлай.

Был мөһабәт ҡоролманың боронғо заманда ниндәй функция үтәгәне тураһында айырым фараздар әйтелә. Мавзолей ҡарауыл башняһы булып хеҙмәт иткән тигән версия бар, ә ҡайһы бер ғалимдар бында суд йорто булыуы мөмкин тип әйтә.

Мавзолей тирәләй археологтар боронғо зыярат тапҡаны билдәле. Ҡалҡыулыҡта тик бөйөк, юғары дәрәжәле кешеләр һәм уларҙың балалары ғына ерләнгән тип иҫәпләнә.

# 10. Сарматтар алтыны

Сармат алтынының бөтә ер йөҙөндә аналогы юҡ. Боронғо күсмә халыҡтарҙың хәрби ҡорамалдары, кәсәләр һәм амфоралар, алтын боландар экспозицияһы - был зиннәтле әйберҙәр Өфө археология һәм этнография музейында туристар өсөн асыҡ.

Сарматтарҙың алтыны Боронғо Филипп ҡурғандарын ҡаҙығанда табыла, һәм был табыштар Көньяҡ Уралды тикшереү тарихында иң сағыуы булып тора. Беҙҙең эраға тиклем IV быуатта уҡ йәшәгән боронғо күсмә халыҡтың аҫыл таштары менән хәҙер Өфөгә килгән һәр турист таныша ала.

«Сарматтар алтыны» коллекцияһы өс залда ҡуйылған. Бында егерменән ашыу «Евразияның алтын боландары» фигураларын күрергә мөмкин.

Тағы бер залда ҡатын - ҡыҙ биҙәүестәре, алтын һәм көмөш һауыт-һабалар-кәсәләр, көршәктәр һәм оҙонса бокал рәүешендәге һауыттар иғтибарҙы йәлеп итә. Ә өсөнсө зал боронғо күсмә кешенең образын тергеҙергә ярҙам итәсәк: бында яугир-сарматтарҙың аммуницияһы-ат ҡорамалдары, боронғо хәрби кейем һәм ҡоралдар, биҙәүестәр ҡуйылған.

Белгестәр билдәләүенсә, сарматтарҙың алтыны тарихи-мәҙәни әһәмиәте буйынса ҡиммәтле. Экспонаттар боронғо ювелирҙарҙың оҫталығы тураһында күп нәмә һөйләй ала. Иң яҡшы артефакттар 2000-се йылдарҙа хатта почта маркаларында һүрәтләнгән. Ә "Алтын боландар" Нью-Йоркта һәм Миланда күргәҙмәләрҙә ҡуйылған!

Музей бинаһы тағы ла бер ҡыҙыҡлы тарихи локация буласаҡ: уға йөҙ йылдан ашыу, һәм ул элек Өфө сауҙагәре Елена Александровна Поносова-Моллоның милке булған. Йорт XX быуат башы архитектура ҡомартҡыһы булып иҫәпләнә.

# 11. Валера талпанына һәйкәл

Донъялағы берҙән-бер көмөш талпан һәйкәле Волга буйының иң ғәҙәти булмаған ҡомартҡылары исемлегенә инә һәм бер-нисә йыл инде баш ҡаланың популяр урындарының береһе булып тора.

Ҡала үҙәгендәге шундай ғәҙәти булмаған арт-объекты ҡайҙан килеп сыҡҡан һәм ни өсөн Валера тип аталған? Һәйкәлде эшҡыуар, сәйәхәтсе һәм ювелир Олег Чегодаев ҡуя. Постаменттағы яҙыуҙа: "Мин дә, һинең кеүек үк, йәшәргә теләйем! " тиелгән. Идея тәбиғәттә насар йәки яҡшы хайуандар, бөжәктәр юҡ тигән фекерҙе символлаштыра. Объект үҙе тайга һәм башҡа тәбиғәт урындары буйлап походта йөрөргә яратыусыларҙы талпан энцефалитынан прививка яһау кәрәклеге тураһында иҫкәртергә тейеш. Талпанға исем мемлы Валераға оҡшатып бирелгән, ул "бөтәһен дә май шашлыктарына саҡыра". Һәйкәл өсөн постамент булып Олег Чегодаев Көньяҡ Уралдың Дүнән һуйған тауы түбәһенән алып килгән таш хеҙмәт итә. Талпан үҙе 925 пробалы көмөштән ҡойолған.

Ҡыҙыҡлы факттарҙан: 2023 йылда талпан һәйкәлен урлайҙар.

Әммә арт-объектты төҙөүсе аптырамай һәм уны тергеҙә, ә Урал тауҙарының яңы көмөш символы оригиналь исемен ала - Талпан Валерий II.

Һәйкәл тағы ла бер мөһим урында – “Урал тауҙары илселеге” эргәһендә, Мостай Кәрим урамы, 44 адресы буйынса урынлашҡан.

“Илселек” тағы ла бер иҫтәлекле локация: тап бында сәйәхәтселәр клубы һәм “Уралдың асыҡ китапханаһы” урынлашҡан. Унда ысын хазина-төбәккә арналған китаптарҙың иң ҙур йыйылмаһы һаҡлана. Бында күргәҙмә залына мотлаҡ барырға кәрәк. Унда Эверестан таш, тәбиғи алтын, тау гәлсәре ҡуйылған, ә ҡунаҡтарға ҡулдарында “Силәбе метеоритын” тотоп ҡарарға тәҡдим итәләр. Магазинда туристарҙы Башҡортостанға арналған биҙәүестәр, китаптар, илһамландырыусы открыткалар һәм башҡа сувенирҙар көтә.

# 12. Мамыҡ шәл- башҡорт шәле

Мамыҡ шәл-башҡорт шәле уникаль ерле брендтарҙың береһенә әйләнде. Хәҙер ул республика сиктәренән алыҫта ла ҙур һорау менән ҡулланыла.

Башҡортостандың Ейәнсура районы башҡорт шәленең аутентик барлыҡҡа килеү урыны булып танылған. Мамыҡ шәл бәйләр өсөн йомшаҡ һәм йылы дебет биргән кәзәгә ошо районның Үтәғол ауылында хатта һәйкәл дә ҡуйылған.

Тарихсылар билдәләүенсә, йөн һәм дебеттән(мамыҡ тип тә әйтелә) бәйләү беҙҙең республикала бик борондан килгән традиция. Беҙҙең эраға тиклемге V- IV быуатттарҙағы сармат ҡурғандарын өйрәнгән ғалим-археологтар табылған тупаҫ туҡыма ҡалдыҡтарын йөндән эшләнгән тип фаразланылар. Табылдыҡтар араһында йөн иләү процесында епте һуҙырға, орсоҡто шәберәк әйләндерергә ярҙам иткән балсыҡ ҡаба-йөксә лә килеп сыҡҡан.

Башҡорт шәле барлыҡҡа килһен өсөн ярайһы ғына ауыр эш башҡарырға кәрәк: бер йөн әйбергә уртаса 300 грамм дебет китә. Тейешле шарттарҙа тәрбиәләнгән кәзә яҡынса 400-800 грамм дебет бирә.

Көньяҡ Урал кәзәләренең мамығы бик уникаль һәм юғары сифатлы-ул йомшаҡ, йыуанлығы -1,5-2-3 мм., оҙонлоғо-4-6 мм. Кәзә мамығының сифатына башҡорт тәбиғәте, климат шарттары, урындағы үлән төрлөлөгө лә тәьҫир итә.

Ейәнсура районында “Башҡорт шәле“ асыҡ брендлы фестиваль-конкурсы булдырылған.Унда беҙҙең яҡтың ҡул оҫталары ғына түгел, Ырымбурҙан да ҡатнашалар. Йәштәр өсөн “Башҡорт шәле һәм студент йәштәр: традицияларҙы тергеҙеү” исемле конкурс-фестивале уҙғарыла. Унда шәл бәйләү техникаһы менән танышырға мөмкин.

Башҡортостандың һәр районы теләгән кешеләрҙе шәл бәйләү буйынса оҫталыҡ дәресендә көтә.

# 13. "Бәлешфест" милли аш-һыу, изгелек һәм берҙәмлек фестивале

200 килограмм ауырлыктағы бәлеште күргәнегеҙ бармы? Ә Бүздәк ауылында, «Бәлешфест» милли аш-һыу фестивалендә, шундайҙы бешерергә һәм байрамға килеүселәрҙе нисек һыйларға кәрәклеген беләләр.

Күҙәй ауыл советы хужабикәләренә бындай гигантты әҙерләү өсөн 15 килограмм он, 120 килограмм картуф, 34 килограмм ит һәм махсус төҙөлгән ҙур мейес, ситтәре бейек таба кәрәк була.

Башҡорт һәм татарҙарҙың традицион ризығы булған сөсө ҡамырҙан бешерелгән бәлеш "Бәлешфесттың " символына әйләнә.

Фестиваль Бүздәк районында 2018 йылдан алып бара һәм урындағы бренд булып тора. Ул асыҡ һауала үткәрелә. Был сара ҡунаҡсыллығы, гастрономик эҙләнеүҙәрҙең күләме һәм төрлөлөгө менән ҡунаҡтарҙың йөрәктәрен яулап өлгөргән.

"Бәлешфесттың" төп үҙенсәлеге булып ҡунаҡтарҙы төрлө халыҡтарҙың аш-һыуҙары менән таныштырыу идеяһы тора. Был байрам халыҡтарҙың үҙенсәлеген һаҡлауға, кешеләрҙең дуҫ һәм берҙәм булыуына булышлыҡ итә. "Бәлешфестта" ҡунаҡтарға традицион башҡорт һәм татар аш-һыуы ғына түгел, рус, мордва, удмурт, мари, сыуаш һәм республикала йәшәүсе башҡа халыҡтарҙың аш-һыуы менән танышыу мөмкинлеге бар.

Фестиваль ҡунаҡтары өсөн конкурстар үткәрелә, ә айырым майҙансыҡтарҙа оҫталыҡ дәрестәрендә ҡатнашырға һәм милли аш-һыу әҙерләргә өйрәнергә була! Шулай уҡ байрамда милли костюмдар тәҡдим ителә, һөнәрселәр үҙҙәренең эштәрен күрһәтә. Милли инструменттарҙа уйнағандарын тыңларға һәм бейергә лә мөмкин.

"Бәлешфестты" Бүздәк районы хакимиәте, Башҡортостан Республикаһының Мәҙәниәт министрлығы, Халыҡтар дуҫлығы йорто, "Башҡортостан Республикаһы татарҙарының милли-мәҙәни автономияһы" төбәк йәмәғәт ойошмаһы, Халыҡ ижады үҙәге ойоштора.

# 14. Екатерина тракты-Бөйөк юлдың иң яңы участкаһы

Ҙур Себер тракты, Батша юлы, Екатерина тракты... Был данлыҡлы маршруттың тарихи атамалары бик күп. Республиканың Учалы районында был иң боронғо ҡоро ер юлының бер өлөшө үтә.

Тәүҙә, XVIII быуатҡа тиклем, трактты юл тип кенә йөрөткәндәр. Бик борондан башланғыс алған маршрут пароход һәм тимер юл бәйләнеше тулыһынса үҫешкәнгә тиклем үк ҙур әһәмиәткә эйә була.

Екатерина трактының оҙонлоғо ғәйәт ҙур: Мәскәүҙән Пекинға тиклем Верхнеудинск (Улан-Удэ) һәм Кяхта аша ул 8332 саҡрым тәшкил итә, башҡа мәғлүмәттәр буйынса-8839. Яҡынса 8888 саҡрым юл!

Екатерина тракты ҡалалар араһында почта бәйләнеше булдырыу, Рәсәйҙең европа өлөшөн Себер менән бәйләү, шулай уҡ Ҡытай менән тотороҡло сауҙа мөнәсәбәттәрен яйға һалыу маҡсатында төҙөлгән.

Учалы районында Себер трактының бер өлөшө 200 йыл элек императрица Екатерина II указы буйынса барлыҡҡа килгән. Юлға таш түшәлгән. Беҙҙең яҡтарҙа трактттың иң яңы өлөшө ята тип иҫәпләнә, юл яҡшы һаҡланған һәм бөгөнгө көнгә тиклем ҡулланыла.

Маршрут түбәндәге йүнәлештәрҙә төҙөлгән: Мулдаш, Ҡужай, Вознесенка, Абҙаҡ, Кесе Муйнаҡ аша Рысай яғына, хәҙерге Өфө-Учалы автотрассаһын киҫеп үтә. Артабан Баҙарғол, Мәҫкәү һәм Верхнеуралға алып бара.

# 15. "Ҡыҙыл өйлә" һәм Давид Бурлюктың башҡа картиналары

"Рус футуризмының атаһы", билдәле шағир Һәм рәссам Давид Бурлюк 1915 йылдан Иглиндә, Бүздәктә йәшәй һәм өс йыл ижадын беҙҙең яҡтарға, Башҡортостандың баш ҡалаһына бағышлай. Атап әйткәндә, урындағы рәссамдар менән этюдтарға йөрөй, яҡынса 200 картина ижад итә! Уларҙың бер өлөшөн бөгөнгө көнгә тиклем Өфөлә Михаил Нестеров исемендәге Башҡорт Дәүләт художество музейында даими экспозицияла күрергә мөмкин.

Өфө художество түңәрәгендә иң яҡшы рәссамдар, башҡорт профессиональ сәнғәтенә нигеҙ һалыусылар - Юлий Блюменталь, Ҡасим Дәүләткилдеев, Александр Тюлькин һәм Порфирий Лебедевтар торҙо. Был түңәрәккә Давид Давидович та йөрөй. Бурлюк урындағы һынлы сәнғәт вәкилдәре менән дуҫ була. Өфө художество түңәрәгендә тороп, "рус футуризмының атаһы" коллегалары менән күргәҙмәләрҙә ҡатнаша, тәжрибәһе менән уртаҡлаша һәм уларға авангард мәҙәниәтен һеңдерә.

Бурлюк төшөргән билдәле картиналарҙың береһе Өфөнө һүрәтләй һәм "Ҡыҙыл өйлә" тип атала. Был картинаны сикһеҙ ҡарарға мөмкин: сағыу буяуҙар ярһыулығы, деталдәрҙең күплеге-мәсет һәм ҡалҡыулыҡ, кешеләр һәм хайуандар, көйәнтәгә биҙрәләр элеп китеп барған ҡатын-ҡыҙ, эттән ҡасҡан ат, көршәк тотҡан ир кеше-былар барыһы ла арбау көсөнә эйә. Рәсемдең бөтә элементтары, рәссам төшөргән бөтә "персонаждар" аныҡ геометрияла. Картина Нестеров музейының беренсе ҡатында ҡуйылған. Ул даими экспозицияла берҙән – бер түгел, Давид Бурлюк ижадына тотош зал арналған. Бында рәссамдың "Йәйғор", "Сирень", "Татар ҡыҙы" һәм башҡа картиналары ҡуйылған. Бурлюктың Өфөлә яҙылған күпселек эштәре Нестеров музейы фондында һаҡлана.

# 16. Һәйбәт хәлдәр-беренсе башҡорт фастфуды

Бөтә донъя баш ҡалаларында моноконцепциялы ресторандар бар. Бындай учреждениеның бөтә ризыҡтары бер продукт нигеҙендә әҙерләнә. Өфөлә «Һәйбәт хәлдәр» милли кафелар селтәре бар. Унда ҡала ҡунаҡтары башҡорттарҙың традицион ризығын-ҡыҫтыбыйҙы тәмләп ҡарай ала.

Учреждениеның күркәм мөхите ишек төбөнән үк ерле колоритты сағылдыра: милли музыка уйнай, тәмле ризыҡ һөйөүселәрҙе неон яҡтыртыуы аҫтында баш ҡаланың символдары-һыуһар һәм ҡурай сәскәһе ҡаршы ала. Бөтә интерьер башҡорт орнаменттары стилендә башҡарылған.

Күмәстәр ғаилә рецептары, өләсәйҙәрҙең рецептары буйынса әҙерләнә. Меню ҡунаҡтарға картуф иҙмәһе йә тары ярмаһы эслеге менән классик ҡыҫтыбый, шулай уҡ шеф-поварҙың заманса вариацияларын тәҡдим итә. «Нәнәй классикаһы», «Ҡартатай мөхәббәте», «Матур батыр»...- бик мауыҡтырғыс һәм үҙенсәлекле исемле бөтәһе ун алты төрҙән ашыу ҡыҫтыбый бар. Ә тәмле ҡоймаҡ, үлән сәйе, ҡарағат йәки һырғанаҡ морсы яҡшы өҫтәмә була ала.

Эслектәрҙең теләгәнен һайлап алырға мөмкин: төрлө сырҙар, семга (һөмбаш), йәшелсә, грилдә ҡыҙҙырылған тауыҡ, фермер хужалығынан килтерелгән һыйыр ите кәтлиттәре...

Милли фастфуд һәм «Һәйбәт хәлдәр» селтәрен 2019 йылда эшҡыуар Марат Нәсхетдинов уйлап таба. Проекттың идеяһы-башҡорт аш-һыуының мәҙәни мираҫын заманса тенденциялар менән бәйләү. Ә учреждение үҙе «һәр деталдә этномодернизм» принцибына таяна. Ҡыҫтыбый кафелары тиҙ арала популярлыҡ яулай һәм бөгөн ҡалала биш селтәр учреждениеһы асылған. "Һәйбәт хәлдәр" милли фастфуд кафеһын түбәндәге адрестар буйынса табырға мөмкин: Өфөнөң тарихи үҙәгендә: Свердлов урамы, 100 һәм Киров урамы, 65\3.

# 17. Бөрө билмәндәре

"Бөрө билмәндәре" - бөгөн республикала ғына түгел, унан ситтә лә билдәле бренд. Сөнки төрлө төбәктәрҙән килгән ҡунаҡтар йыл һайын ғинуар каникулдарында үткәрелгән был гастрономия фестиваленә барып, урындағы етештереүселәрҙең билмәндәрен тәмләп кенә ҡалмай, шулай уҡ ялдарын яҡшы үткәрә. Бөрө сауҙагәрҙәр ҡаласығы һәр ваҡыт ҡунаҡтарын ихлас ҡабул итә.

"Бөрө билмәндәре" фестивале Октябрь майҙанында үткәрелә, уға инеү ирекле. Ойоштороусылар әйтеүенсә, фестиваль-бөтә ғаилә өсөн ысын байрам. Билмәнде символик хаҡҡа тәмләп ҡарарға мөмкин, ҡайһы берҙә ул ни бары биш һум тәшкил итә!

Бөрөлә был туҡлыҡлы һәм тәмле ризыҡты 90-сы йылдарҙа етештерә башлайҙар, һәм ҡала яйлап республиканың «билмәндең баш ҡалаһына» әйләнә. Бөгөнгө көндә Бөрөлә егермеләп ярымфабрикат етештереүсе иҫәпләнә.

Бөрө билмәндәрен һаҡлап ҡалыу һәм брендты популярлаштырыу-урындағы гастрономия фестивале нигеҙенә һалынған идея. Бында ҡунаҡтарҙы төрлө етештереүселәрҙең кулинар традициялары һәм иң яҡшы продукция менән таныштыралар. Һәр ҡунаҡтың күңеленә хуш килгән аҙыҡ табыу мөмкинлеге бар.

«Бөрө билмәндәре» фестивале майҙансығында сауҙа нөктәләре эшләй. Халыҡ ижады менән ҡыҙыҡһыныусыларҙы һөнәрселек кибеттәре көтә. Фестивалдә концерт, спорт эстафеталары, әүҙем уйындар һәм теләгән һәр кем өсөн билмән эшләү буйынса оҫталыҡ дәресе үткәрелә.

2022 йылда «Бөрө билмәндәре» фестивале «100 000-гә тиклем кеше йәшәгән тораҡ пунктта гастрономия туризмы өлкәһендә иң яҡшы ваҡиға» номинацияһында Russian Event Awards Халыҡ-ара премияһының Гран-приһына лайыҡ була.

# 18. Иң төнъяҡ йөҙөмө

Илдә иң төнъяҡ йөҙөм плантацияһы бар һәм ул республиканың Кушнаренко районында урынлашҡан. Был уникаль еләк үҫтереү өсөн яҡынса өс ярым гектар ер бүленгән. Башҡорт йөҙөмө махсус сорты Урал һыуыҡтарынан да ҡурҡмай. Ул брендҡа әйләнеп, Европаны Һәм Азияны яуланы.

Көньяҡ туғанынан башҡорт йөҙөмө размеры менән айырыла- емештәре бер аҙ вағыраҡ, ә уңдырышлылығы буйынса башҡа культураларҙан ҡалышмай.

Был ерҙәрҙә XIX быуатта сауҙагәр династияһына ҡараған Грибушиндар йәшәгән. Сауҙагәрҙәр сәй менән һатыу итә, туғыҙ йөҙ алма ағасы ултырта. «Сеянец Титовки»(«Титовка үҫентеһе») һәм «Башкирский красавец»(«Башҡорт матуры») алмаларының сорттарын сығара.

Хәҙер уларҙың баҡсалары һәм оранжереялары урынында селекция үҙәге эшләй, унда ғалим-баҡсасылар сауҙагәрҙәр башлаған эште дауам итә кеүек: алма, груша, ҡарағаттың юғары емешле сорттарын сығаралар.

Бөтә Рәсәйҙән баҡсасылар питомникҡа үҙҙәре теләгән үҫентеләрен һатып алыу өсөн килә. Ә көҙ аҙағында селекция үҙәгендә өй шарабы эшләү өсөн әҙерлек башлана.

Кушнаренкола йыл һайын фольклор байрамы ойошторола, ул райондың визит карточкаһына әйләнгән инде. Август айында үткән был байрам "Кушнаренко йөҙөм һабағы" тип атала. Бында ҡунаҡтар шарап һәм йөҙөм тәмләп ҡарайҙар. Сәхнәлә республиканың иң яҡшы халыҡ коллективтары сығыш яһай, ә айырым зонала милли аш-һыуҙан ауыҙ итергә мөмкин.

# 19. “Ашарға! ” фестивале

Һәр йәй Өфө халҡын Волга буйындағы иң ҙур тип әйтерлек, масштаблы “Ашарға!” гастрофестивале ҡыуандыра. «Өфө-Арена» стадионы алдындағы майҙан өс көнгә аш-һыу әҙерләүселәрҙе һәм ашарға яратыусыларҙы йәлеп итеү нөктәһенә әйләнә. Ҡаланың йөҙҙән ашыу учреждениеһы үҙҙәренең иң яҡшы ризыҡтарын тәмләп ҡарарға тәҡдим итә. Аш-һыу оҫталары асыҡ утта һеҙҙең күҙ алдығыҙҙа ризыҡтарҙы әҙерләй. Бында ресторан эшенең оҫталары араһында ысын ярыштар бара.

Ҡаҙанда әҙерләнгән ысын пловтан алып диңгеҙ продукттарынан һәм милли стрит-фудтан торған нәзәкәтле ризыҡтарға тиклем һәр кем фестивалдә үҙенә ашарға табасаҡ. Бында шулай уҡ ҡаланың бар учреждениелары менән танышырға мөмкин-тәбиғи продуктлы төнәтмәләр, крафт һыраһы, ә алкоголһеҙ продукцияны яратыусылар сәй, шулай уҡ автор лимонадтары менән һыйлана йәки махсус рецепт буйынса яҡшы кофе тәмләп ҡарай ала. Десерт һөйөүселәр ҙә иғтибарһыҙ ҡалмаясаҡ – бер нисә локация тәм-том менән ҡыуандырасаҡ.

Гастрофестивалдең иң үҙенсәлекле урыны - "фермерҙар урамы". Тап бында республиканың локаль продукцияһын тәҡдим итәләр. Фестиваль үҙ майҙансығында фермерҙарҙы һәм рестораторҙарҙы берләштерә. Гастротур ҡунаҡтарының урындағы һөт продукцияһын, сыр, балыҡ, йылҡы итен тәмләп ҡарау, һатып алыу мөмкинлеге бар.

Фестивалдә балалар һәм өлкәндәр өсөн күңел асыу майҙансыҡтары эшләй. Концерттарҙа урындағы автор музыкаль проекттары һәм фолк-төркөмдәр сығыш яһай, был туристарға заманса Өфө музыкаһы менән танышырға мөмкинлек бирә. Ә кисен саҡырылған хедлайнерҙарҙың билдәле хиттарына бейергә мөмкин. Бөтә илдән гастротуристар был ысын мәғәнәһендә тәмле ваҡиғала булырға тырыша.

# 20. Ҡыҙыл сығанаҡ-ер йөҙөндәге иң ҙур шишмәләрҙең береһе

Тиҫтәләрсә мең йыл элек республиканың Хәҙерге Нуриман районы биләмәһендә ике ҙур карст борғағы барлыҡҡа килә, улар берләшә һәм аҡһыл төҫтәге гигант шишмәгә ғүмер бирә. Революцияға тиклем ул Аҡ сығанаҡ тип атала.

Бөгөн был инеш Ҡыҙыл сығанаҡ булараҡ билдәле һәм Европала иң ҙур шишмәләрҙең береһе тип танылған. Ул Өфө йылғаһының һул ярында, шул уҡ исемле ҡасаба ситендә урынлашҡан. Ҡыҙыл сығанаҡ күл-ҡоҙоҡ һымаҡ: ундағы борғаҡтың тәрәнлеге яҡынса 40 метрға етә, ә бәләкәйерәгенеке-20 метрҙан кәмерәк. Һыу Яманйылға йылғаһы бассейнының ярыҡтарында һәм карст каналдарында әйләнә. Сығанаҡта эзбизташ күп, сөсө. Йыл әйләнәһенә шишмәлә һыу температураһы + 5-6 градус. Был шишмә Өфө йылғаһын йылыта: һыуыҡ көндәрҙә барлыҡҡа килгән йылыуҙа өйрәктәр ҡышлай.

90-сы йылдар аҙағында шишмә һыуын шешәләргә тултырып, һата башлайҙар. Бөгөн республиканың теләһә ниндәй ҡалаһында «Ҡыҙыл сығанаҡ» минераль һыуын һатып алырға мөмкин. Һыуҙың ағымында 2000-се йылдар башында плотина һәм бәләкәй ГЭС төҙөлә.

Ҡыҙыл сығанаҡ ял итеү өсөн бик яҡшы урын булып тора. Ҡышҡыһын буксирлау канат юлы менән тау саңғыһы трассаһы эшләй. Бында йәйәү йөрөү өсөн дә бик уңайлы: битләүҙәр ылыҫлы урман менән ҡапланған, ә шишмә тирәләй ҙур булмаған парк, беседкалар, эскәмйәләр һәм балалар майҙансығы бар. Кафе һәм сувенирҙар кибете эшләй.

# 21. «Ваҡыт йылғаһы» реконструкция фестивале

Бер көн эсендә төрлө тарихи дәүерҙәргә барып сыҡһаң, ниндәй тойғолар кисерәһең икән? Полководец Кутузов осорондағы рус һалдаттарын һәм шунда уҡ Ҡыҙыл Армия һуғышсыларын күрһәң? Был һорауға теүәл яуапты Бөрөлә беләләр, сөнки йыл һайын «Бөрө ҡәлғәһе» милли паркы Рәсәйҙең төрлө субъекттарынан тарихи клубтар өсөн майҙансыҡҡа әйләнә. Ҡалала «Ваҡыт йылғаһы» тип аталған ҙур реконструкция фестивале үтә. Фестиваль масштаблы булыуы менән үҙенсәлекле. Бында алты тарихи осорҙарҙың ваҡиғаларына шаһит булырға мөмкин:

-Урта быуаттар осоро,
-XVII быуат уҡсылары күрһәткән Яңы заман осоро,
-Башҡорт күсмәһе осоро (XVIII быуат),
-1812 йылғы Ватан һуғышы осоро,
-Беренсе донъя һуғышы осоро,
-Бөйөк Ватан һуғышы осоро.

Фестиваль май айында үтә һәм ике өлөшкә бүленә: беренсеһе – төрлө дәүерҙәрҙе сағылдырған хәрби-ялан лагерҙары, икенсеһе – алыштарҙы реконструкциялау. Йыл һайын «Ваҡыт йылғаһы» тиҫтәнән ашыу төбәктән хәрби-тарихи реконструкция клубтарынан ике йөҙгә яҡын ҡатнашыусыны йыя.

Фестивалде ойоштороусылар үҙҙәренең алдына ошондай маҡсат ҡуя – тамашасылар өсөн аутентиклыҡ һәм интерактивлыҡ булдырыу. «Үҙеңде ниндәйҙер дәүерҙә билдәле бер ваҡиғаның башланғысында тип хис ит» - ваҡиғаның нигеҙ итеп алынған мөрәжәғәте. Идеяһы-йәштәрҙе патриотик тәрбиәләүгә булышлыҡ итеү, тарихҡа ҡыҙыҡһыныу һәм үткәндәрҙе өйрәнеү, Рәсәй армияһын үҫеш ракурсында күрһәтеү. Бындай ваҡиғаларҙан айырмалы рәүештә, «Ваҡыт йылғаһын» мультифестиваль тип атарға мөмкин, сөнки бында тыуған яҡтың күп милләтле мәҙәниәтенә арналған интерактив майҙансыҡтар күрһәтелә.

«Ваҡыт йылғаһы» ҡунаҡтарын мушкеттарҙан атыу, пушка залптары, Бөйөк Ватан һуғышы осорондағы алыштар фрагменттары, һауа һуғышында һөжүмде күреү мөмкинлеге һәм башҡа күп нәмәләр көтә. Фестиваль йәштәргә генә түгел, киң аудиторияға ла иҫәпләнгән.

2020 йылда «Ваҡыт йылғаһы» ваҡиғалы туризм өлкәһендәге милли премия еңеүсеһе булды. Уны ойоштороусылар булып ӨФҺТУ-ның Бөрө филиалы, БР «РОСРЕКОН» ООД республика бүлексәһе, «Бөрө ҡәлғәһе», «Туризмды үҫтереү үҙәге» Автономиялы Коммерцияға ҡарамаған Ойошмалары сығыш яһай.

# 22. Йөрәктау шиханы-яланғас тау

Стәрлетамаҡ ҡалаһы эргәһендәге һөҙәк битләүле иң төньяҡ шихан Йөрәктау тип атала. Торатау һәм Ҡуштау кеүек үк, яҡынса 230-280 миллион йыл элек барлыҡҡа килгән боронғо мәрйен рифы. Риф тектоник хәрәкәттәр һөҙөмтәһендә ер өҫтөнә килеп  сыҡҡан. Йөрәктауҙы урындағы халыҡ Яланғас тау тип атай, сөнки ул иң аҙ урманлы шихан. Тауҙың бөтә битләүҙәрендә лә башлыса дала үҫемлектәре үҫә, төньяҡ битләүенән тыш бында саған һәм имәндәр бар.

Унының тупраҡ кимәленән бейеклеге 200 метр, оҙонлоғо 1 саҡрым, киңлеге 850 метр тәшкил итә. “Торатау“ геопаркы составына инә һәм тәбиғәт ҡомартҡыһы статусына эйә. Йөрәктауҙың төньяҡ битләүендә минераль һәм көкөртлө сығанаҡтар бар, ә карст борғағында, шихандың көнсығыш битләүе янында, сфагнумдан - торф мүгенән торған сфагн һаҙлығы урынлашҡан. Шиханды Ағиҙел йылғаһы урап үтә. Итәгендәге Мокша күлендә һыу инергә мөмкин.

Йөрәктауға 20-30 минутта еңел генә күтәрелергә була.  Шихандың һырты буйлап мәрйен һуҡмағы үтә, унан мәрйен колонияларын, ташҡа әүерелгән умыртҡаһыҙ диңгеҙ хайуандарын – һимерүләндәрҙе (мшанкаларҙы) күрергә мөмкин.

“Йөрәктауҙың” барлыҡҡа килеүе тураһында башҡорт легендаһы бар.

Ишбулды исемле егет Гөлсирә исемле ҡыҙға ғашиҡ була. Ҡыҙ унан үҙенең мөхәббәтен иҫбатлауын һорай – уға әсәһенең йөрәген килтерергә ҡуша. Егет һөйгәненең ихтыярын үтәй, әммә абынып, йөрәкте ергә төшөрөп ебәрә. Үлер алдынан әсәһенең йөрәге: “Улым, һин яраланманыңмы?“-тип һорай һәм ташҡа әйләнә. Шулай итеп, йөрәккә оҡшаған тау барлыҡҡа килә.

Тағы бер легенда шихандарҙың нисек барлыҡҡа килеүе тураһында һөйләй. Ашаҡ исемле егет Ағиҙел исемле йәш ҡыҙға ғашиҡ була һәм уның һөйгәнен үлтерә. Ашаҡ Ағиҙелде урлай, әммә ҡыҙ ҡасып ҡотола ала. Егет уны ҡыуып етә, ә ат ҡыҙҙың юлын ҡаплай. Ағиҙел ярҙам һорап доға ҡыла башлауы була, шунда уҡ йылғаға әйләнә. Ашаҡ йылғаның ярһып аҡҡан һыуҙарына тотона алмай һәм йөрәген уға ташлай. Егеттең йөрәгенең дүрт ярсығы Торатау, Ҡуштау, Йөрәктау, Шахтау (хәҙер унда карьер) шихандары булып китә.

# 23. Ҡағы ауылы

Тыуған яҡ-Башҡортостандың һанлы атласы: Ҡағы ауылы, изге шишмә һәм Вәғәҙә ителгән көн байрамы.

Урал тауҙарының көньяҡ өлөшөндә иҫке дин кешеләре (староверҙар) нигеҙ һалған боронғо ауыл бар. Ауыл бында XVIII быуаттың беренсе яртыһында барлыҡҡа килә. Ул республиканың Белорет районында, Ағиҙел һәм уға ҡойоусы Ҡағы йылғалары араһында урынлашҡан.

Урындағы легендаларҙы тыңлаһаң, тарих төпкөлө атмосфераһына сумырға мөмкин, шуға күрә ауыл үҙе тәбиғәт һөйөүселәр өсөн ҡыҙыҡлы маршрутҡа әйләнеп киткән.

Ауылдың Ҡағы тип аталыуы тураһында ике версия бар. Бер фараз буйынса, буласаҡ ауылға тәүге төпләнеүселәрҙе ға-ға тауыштары сығарған ҡоштар өйөрө ҡаршы ала. Икенсеһе-кага аббревиатураһы, ул административ-дәүләт тотҡондары колонияһы (колония административно-государственных арестантов) тигәнде аңлата.

Ҡағының  үҙенең байрамы бар-21 августа бында Вәғәҙә ителгән көн үтә. Ул туранан-тура урындағы иҫтәлекле урын-Сажелка шишмәһе менән бәйле. Шишмә тураһында легенда йөрөй: ҡасандыр ауылда ҡоролоҡ башлана. Йылға бысранған, ә ауылдағы бөтә ҡоҙоҡтар һәм шишмәләр ҡороған. Кешеләр холеранан үлә. Ауылдың иҫән ҡалған халҡы ғибәҙәт ҡылырға ҡарар итә һәм тәреләр тотоп, ауылдың көнсығыш сигендәге шишмәгә юллана. Ошо ваҡиғанан һуң үлемесле эпидемия тамамлана, ә Ҡағы халҡы ауырыуҙан ҡотолоу көнөн иҫтә тоторға вәғәҙә бирә. Бөгөнгө көнгә тиклем Сажелка янында үткәрелгән байрам шул рәүешле барлыҡҡа килә. Шишмә һыуы бик тәмле, шифалы. Мең йыллыҡ башында шишмә өҫтөндә революциянан һуң емерелгән сиркәү урынына часовня төҙөлә.

Изге Николай сиркәүендә экскурсиялар үткәрелә. Бында стена рәсемдәре һаҡланған, ә сиркәү үҙе архитектура ҡомартҡыһы тип танылған: ул революцияға тиклем үк халыҡ иғәнәләренә урындағы заводта етештерелгән кирбестән төҙөлгән. Шуныһы ҡыҙыҡ, урындағы китапхана ла “Сажелка” исемен йөрөтә. Бында фольклор байрамдары үткәрелә һәм Ҡағы тарихы, боронғо йолалар тураһында күберәк белергә мөмкин. Китапхананың эске күренеше рус горницаһы эстетикаһында башҡарылған.

# 24. Көньяҡ Урал һуҡмағы

Уралдың мөһабәт тауҙары өс йөҙ миллион йылдан ашыу элек барлыҡҡа килгән, һәм иң уңайлы маршруттар тап ошонда, республикала башлана. Оҙон булып һуҙылған тау һырттары, ылыҫлы урмандар, таҙа йылғалар һәр ваҡыт сағыу тәьҫораттар ҡалдыра һәм был иҫ киткес урындарға кире ҡайтыу теләге тыуҙыра. Шуға күрә, күптән түгел генә башҡорт тәбиғәтенең байлығын асҡандар өсөн дә, шулай уҡ эске туризмды күптән үҙләштергәндәр өсөн дә ғәйәт ҙур маршрут бар: 500 км билдәләнгән Көньяҡ Урал һуҡмағы!
Һуҡмаҡ Магнитогорск ҡалаһынан алыҫ түгел, Башҡортостандың Әбйәлил районындағы Яҡтыкүл күленән башлана һәм өс милли парк аша үтә! Ул Силәбе өлкәһендәге Турғаяҡ күлендә тамамлана.
Һәр һуҡмаҡ участкаһы өсөн инеү һәм төшөү нөктәләре бар. Туристарҙың бер көн эсендә тауҙы яулап алыу, маршруттың бер өлөшөн үтеү, урманда булыу, иҫтәлекле урындарҙы күреү һәм ҡунаҡ йорттарында туҡталыу мөмкинлеге бар.
Проектҡа нигеҙ һалыусы Рәйес Ғәбитов ирекмәндәр командаһы менән бергә маршрут идеяһын һәм концепцияһын әҙерләне. Шуға күрә туристарға ниндәй йүнәлеш һайларға икәнен уйларға ла кәрәкмәй.
Проект командаһы 2017 йылдан алып маршруттар һала һәм маркировкалай. Алты йыл эсендә Көньяҡ Урал һуҡмағының дүрт участкаһы барлыҡҡа килә: Яҡтыкүл- Белорет (161 км), Белорет-Ирәмәл (155 км), Төлөк-Златоуст (116 км), Тағанай -Турғаяҡ (49 км).
Урындағы фауна бик күп төрлө: бында айыуҙар, бүреләр, төлкөләр, мышылар, ҡуяндар, һыуһарҙар һәм башҡа хайуандар йәшәй.
Проектты төҙөүселәр билдәләүенсә, яңы сәйәхәт итә башлаусы туристар йәки ғаилә менән сәйәхәт итеүселәр өсөн еңел һуҡмаҡ участкалары бар, мәҫәлән, Яҡтыкүл-Белорет участкаһы йәки Тағанай милли паркы.
Хәҙер Көньяҡ Урал һуҡмағы үҫешен дауам итә. Әшә ҡалаһын Турғаяҡ күле менән тоташтырыусы көнбайыш участкаһы әҙерләнә. Киләсәктә проектҡа «Шүлгәнташ» ҡурсаулығы, «Башҡортостан» милли паркы, Шүлгәнташ мәмерйәһе, Үрге Әүжән, Мораҙым тарлауығы кеүек объекттарҙы индереү күҙаллана.

# 25. Ҡуштау шиханы йәки Оҙаҡ тау

Башҡорт телендә “ҡуштау” парлы тау тигәнде аңлата. Был ғәжәп түгел, сөнки ситтән ҡарағанда Ҡуштау шиханы дүрт километр оҙонлоҡтағы ике тау һырты булып күренеп тора!
Икенсе аңлатма буйынса, “ҡуш” һүҙе “йыйыу” тип аңлатыла, йәғни йыйылыу урыны, хатта, изге урын. Өсөнсө фараз да ҡыҙыҡлы, унда ҡуш-ул ҡош, тимәк, ҡош – тау тигәнде аңлата.
230 миллион йылдан ашыу элек тропик диңгеҙҙә уникаль мәрйен рифы барлыҡҡа килгән. Бөтә шихандарҙан Ҡуштау үҙенең ғәйәт ҙур майҙаны менән айырылып тора. Уның киңлеге 0,7-1,4 саҡрым тәшкил итә. Табан кимәленән бейеклеге 251 метрға етә. Шихандың өс түбәһе бар. Дала үҫемлектәре менән ҡапланған.
Ҡуштау Башҡортостандың Стәрлетамаҡ районында, Стәрлетамаҡ ҡалаһынан 18 километр алыҫлыҡта урынлашҡан. Шиханды уратып Ағиҙел йылғаһы аға. Урындағы төбәкте һәм тауҙың үҙен өйрәнгәндә археологтар ауыл, шулай уҡ саҡмасалыҡ (кремний), ярсыҡтар, ҡул эштәре, бронза һөңгө, ҡыҫҡа һаплы һөңгө осо, яҫы бронза бысаҡтың бер өлөшөн, бронза балта һәм башҡа әйберҙәрҙе таба.
“Ҡәрҙәштәре” кеүек үк, Ҡуштау “GEOSITES” бөтә донъя әһәмиәтендәге геологик мираҫ исемлегенә индерелгән һәм “Рәсәйҙең ете мөғжизәһе” проектының шорт-листына һайланған. 2020 йылдан төбәк әһәмиәтендәге айырыуса һаҡланған тәбиғәт территорияһы тип танылған, йәғни тәбиғәт ҡомартҡыһы һанала. Тау ҡыҙыл китапҡа ингән үҫемлектәр һәм хайуандар өсөн терәк-таяныс булып тора.
Туристар өсөн Ҡуштау шиханы итәгендә “Шихандар” ял йорто һәм “Алға” ял базаһы урынлашҡан. Ә ҡышҡыһын спортсыларҙы “Ҡуштау”тау саңғыһы комплексы көтә.

# 26. Нарыҫтау тауы - ”Башҡортостан Мәккәһе”

”Башҡорт Мәккәһе”, ”теләк тауы”, ”көс урыны” – республиканың Миәкә районында урынлашҡан Нарыҫтауҙы тап ошондай эпитеттар менән атауҙары осраҡлы түгел, сөнки был хаж ҡылыусылар һәм туристар өсөн популяр маршрут.  Тау аҫтында мәсет, шифалы шишмә, ағастан эшләнгән махсус һыу инеү урыны һәм изге ҡәберлектәрҙән торған туристик комплекс урынлашҡан, ә тауға юл үҙе матур убалар аша үтә.
Нарыҫтауҙың итәгенән үк туристарҙы Изге Ғәле шишмәһе ҡаршылай. Уның һыуы бик таҙа, сөнки унда көмөш иондары бар. Ирҙәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар өлөшөнә бүленгән махсус һыу инеү урындарына сумып, һаулыҡты нығытырға мөмкин. Туристар бында йылдың төрлө миҙгелендә һыу инә. Теләүселәр юлға шишмә һыуын да ала. Алыҫ түгел  Сәхәбә мәсете бар. Мәсеттең күренеше бик матур - тирә-яҡта башҡорт далаһы һәм манаралар, колонналар, осло башнялар үҙҙәренә тарта. Мәсеттә доға ҡылырға мөмкин; мәсет ишеге башҡа дин тотҡан туристар өсөн дә асыҡ.
Нарыҫтауҙан Дим йылғаһына, быуаға һәм яҡын-тирәләге ауылдарға иҫ киткес күренеш асыла. Тау түбәһендә тәүге сәхәбәләр Зөбәйер Ибн Зәйет һәм уның улы Абдуррахман Ибн Зөбәйер ерләнгән тип иҫәпләнә. Улар Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең күрһәтмәһе буйынса ислам динен таратҡандар. Башҡорт еренә мосолман динен тап улар алып килгәндәр. Ҡара таш плитәләрҙә алтын ғәрәп хәрефтәре менән сәхәбәләрҙең исемдәре яҙылған.
Икенсе версия буйынса, бында боронғо башҡорт эпосы геройҙары – Иҙеүкәй һәм уның улы Мораҙым ерләнгән. Иҙеүкәй батыр Алтын Урҙа ханы Туҡтамышҡа ҡаршы һуғыша.
Һәйкәлдәр өҫтөндә металдан селтәрләп үреп эшләнгән аҡ “тирмәләр” төҙөлгән, уларҙың башын ислам дине өсөн традицион ярым ай биҙәй, эргәһендә эскәмйәләр урынлашҡан. Легенда буйынса, әгәр ҡәберҙе ете тапҡыр урап үтеп, теләгеңде әйтһәң, ул үтәләсәк. Ошонан “теләк тауы” тигән атама килеп сыҡҡан.
Матур тәбиғәт ҡосағында оҙағыраҡ ваҡыт үткәрергә теләгән туристар Өсөн Илсеғол ауылында “Нарыҫтау” туристик базаһы бар. Ял базаһы йыл әйләнәһенә эшләй, эргәһендәге быуала балыҡ тотоп, ял итергә мөмкин.

## 27. Рәсәйҙә юғары уҡыу йорттары араһындағы беренсе студенттар кампусы- Евразия фәнни-белем биреү үҙәге

Рәсәйҙә юғары уҡыу йорттары араһындағы беренсе студенттар кампусы Өфөлә биш йыл элек эшләй башланы. Республика проекты «Фән һәм университеттар» милли проектының федераль программаһын тормошҡа ашырыу буйынса лидер булды һәм «Сколково» фонды эксперттары тарафынан илдә иң яҡшыһы тип билдәләнде! Бындай күләмле белем биреү проектын булдырыу идеяһын РФ президенты Владимир Владимирович Путин тәҡдим итә.
Фәнни-белем биреү үҙәге (НОЦ) концепцияһы нигеҙендә студенттар, ғалимдар үҙҙәренең фәнни проекттарын булдыра һәм үҫтерә, ижади һәм уҡыу процестарын дөрөҫ төҙөр өсөн ентекле уйланылған, ойошторолған торлаҡ мөхите шарттарында үҙҙәрен уңайлы тойоу мөмкинлеге биргән ҡеүәтле кампус булдырыу идеяһы ята.
Алдынғы етештереү технологиялары һәм инжиниринг, цифрлы һәм «йәшел» химия, энергетика, биомедицина һәм генетика-бөгөн фәнни - белем биреү үҙәге эшенең төп йүнәлештәре. Ғалимдар һәм студенттар алдында сәнәғәткә алдынғы технологияларҙы йыйыу, анализлау, эшләү һәм индереү бурысы тора.
Евразия фәнни-белем биреү үҙәгендә алты юғары уҡыу йорто, өс ғилми учреждение һәм 30 индустриаль партнер иҫәпләнә, 42 ойошманың эше өсөн яуаплы. Бында 6 федераль проект һәм 20-нән ашыу белем биреү программаһы тормошҡа ашырыла. Биш йыллыҡ эш һөҙөмтәләре бар: был ваҡыт эсендә ғалимдар 2,3 меңдән ашыу патент алған, ә производствоға 471 алдынғы технология тапшырылған.
Хәҙер кампуста 21 лаборатория иҫәпләнә һәм был башланғыс ҡына. Үҙәк территорияһында төҙөлөш әүҙем алып барыла. Һөҙөмтәлә 4300 студент урыны, уҡыу блоктары, геном үҙәге, лабораториялар, ижтимағи-эшлекле киңлек булдырыласаҡ.
Кампустың беренсе бинаһы ҡаланың тарихи үҙәгендә, Зәки Вәлиди урамындағы 32/2 адресы буйынса урынлашҡан һәм республиканың милли символы булған ҡурайға оҡшатып эшләнгән. План буйынса урынлашасаҡ ете бейек бина ете башҡорт ырыуын символлаштыра. Фәнни-мәғариф үҙәге 2025 йылдың аҙағына төҙөлөп бөтәсәк.

# 28. Салауат ере

Республиканың милли геройы, сәсән, шағир, Пугачев ихтилалында әүҙем ҡатнашыусы Салауат Юлаев хәҙерге Янғантау геопаркы урынлашҡан Тәкәй ауылында тыуған. Күптән түгел, 2024 йылда, уның территорияһында геройға арналған иҫтәлекле урын барлыҡҡа килде. Экотроптар менән яңы паркты Салауат ере тип атайҙар.
Был төбәк көс алыу урыны булараҡ билдәле һәм хәҙер сәйәхәт итергә яратыусылар өсөн ҡыҙыҡлы маршрут булып һанала. Парктың майҙаны 4,5 гектар тәшкил итә. Парк концепцияһы өсөн нигеҙ булып башҡорт яҙыусыһы, драматург һәм шағир Мостай Кәримдең “Салауат. Өн аралаш ете төш” әҫәре тора.
Тарихи-мәҙәни комплекста ун нөктә иҫәпләнә. Улар буйлап туристар, һыйыр муйынындағы ҡыңғырауҙар тауышына оҡшаған «ел музыкаһын» тыңлап, әкрен генә сәйәхәт итә. Һуҡмаҡ ҡул эҙҙәре ҡалдырылған таштан башлана. Сәйәхәттән ҡайтҡас, ташҡа ус менән  ҡағылып ”Һаҡланың, һатманың, онотманың“ тип әйтергә кәрәк.
Салауат ере паркы объекттары милли геройҙың тормошо тураһында һөйләй - был ”Батырға табыныу үҙәне“ исемле таштан эшләнгән тирмә менән мәңгелекте символлаштырған ”Ҡапҡа“ стелаһы. ”Рале“ символы менән ҡөрьән ҡуя торған ҡулайлама ”Тыуған илде һағыныу“ тип атала һәм  уның янында туристар ял итә ала. ”Бала саҡ тураһында хәтирәләр“ нөктәһендә күпер аша Көҫкәнде (Ҡондоҙтамаҡ) йылғаһын үтергә кәрәк. ”Әсә менән осрашыу үҙәне“ һуҡмағында ҡатын - ҡыҙ фигураһын күрергә, ултырып, талир тәңкә сыңын тыңларға мөмкин. Тағы ла ҡыҙыҡлы урындарҙың береһе, һуңғы локация - Салауат Юлаев шиғырҙары яҙылған кортен ҡоросонан эшләнгән стелалар. Шиғырҙар рус һәм башҡорт телдәрендә яҙылған.

# 29. Торатау шиханы-ҡәлғә-тау

Шихандар, йәки яңғыҙ тауҙар “Рәсәйҙең ете мөғжизәһе“ исемлегенә индерелгән. Әлбиттә, был осраҡлы түгел, сөнки мөһабәт тауҙар бик борон барлыҡҡа килгән. Улар эзбизташтарҙан төҙөлгән Палеоурал океанының коралл рифтары фрагменттарынан ғибәрәт (285-299 миллион йыл элек), конус формаһында һәм ҡалҡыулыҡтарҙы хәтерләтә. Бөтәһе өс шихан - Торатау, Ҡуштау һәм Йөрәктау.
Иң билдәле тау - республиканың Стәрлетамаҡ районында урынлашҡан Торатауҙыр, моғайын. Бер фараз буйынса уның исеме башҡорт телендә “ҡәлғә-тау” тигәнде, икенсе версияла “юғары закон тауы” тигәнде аңлата. Торатау ошо уҡ исемле геопарк составына инә. Урындағы халыҡ тарафынан бик хөрмәт ителә. Ишембай ҡалаһының һәм райондың символы булып тора. Шихан һүрәте ҡаланың гербына һәм флагына төшөрөлгән. Торатау өс тау араһында иң бейеге һанала - иң ҡалҡыу урыны яҡынса 280 метрға етә. Шихандан бер юлы Стәрлетамаҡ, Ишембай һәм Салауат ҡалаларын күҙәтергә мөмкин.
Элек Торатау шиханы хаж ҡылыу урыны булған. Тикшеренеүселәр раҫлауынса, тауҙа йолалар үткәрелгән, ә урын үҙе изге тип һаналған.
Тауҙы ете тапҡыр урап сыҡһаң, теләгең тормошҡа аша, тигән ышаныу бар.
Торатау археология ҡомартҡыһы, тәбиғәт ҡомартҡыһы булып тора. “GEOSITES” бөтә донъя геологик мираҫ исемлегенә индерелгән. Урындағы флора һәм фауна уникаль: бында Ҡыҙыл китапҡа индерелгән 400-ҙән ашыу үҫемлек һәм 120 хайуан төрҙәре осрай.
Шихан итәгендә, төньяҡта, Башҡортостанда иң тәрән карст күлдәренең береһе - Туғар һалған урынлашҡан. Ә көньяҡ битләүендә һөргөнгә ебәрелгән ГУЛАГ-тар йәшәгән емерек барактар һаҡланған.
Хәҙер Торатау шиханы сәйәхәтселәрҙе тауға күтәрелеүгә рухландыра, парапланеристарҙы ла үҙенә йәлеп итеү нөктәһе булып тора. Бында ял итеү урындары бар, ҡунаҡханала туҡталырға мөмкин, тауға күтәрелергә теләүселәр өсөн экскурсиялар үткәрелә.

## 30. Китап байрамы-китап йәрминкәһе, китап уҡыған кешенең байрамы

Йыл һайын Өфө май айында төбәк нәшриәттәре, яҙыусылар, уҡыусылар, актерҙар һәм рәссамдар өсөн мәҙәни йәлеп итеү нөктәһенә әүерелә. Бында китап уҡыусы кешенең ҙур байрамы-китап йәрминкәһе үтә, ул Мәскәүҙең “Ҡыҙыл майҙан“ фестиваленә оҡшаш.
Йәрминкә Совет майҙанында урынлаша. Өс көн буйына был урын ҡунаҡтар өсөн йәйәүлеләр зонаһына әйләнә.
Рәсәйҙең төрлө мөйөштәренән һәм яҡын сит илдәрҙән ике йөҙҙән ашыу нәшриәт үҙҙәренең иң яҡшы китап продукцияһын тәҡдим итә. Нәҡ “Китап-байрамда“ бәләкәй халыҡтар телдәрендәге әҙәбиәт менән танышырға мөмкин, сөнки бында төбәк нәшриәттәре вәкилдәре йыйыла. Китаптар ярайһы уҡ арзан хаҡҡа, йыш ҡына ташламалар менән һатыла.
“Китап-байрам” төрлө зауыҡлы уҡыусыға әҙәбиәт һайларға мөмкинлек бирә: мифтар һәм легендалар, милли республика халыҡтарының әҙәби-нәфис баҫмалары, нон-фикшн, беллестристика һәм уҡыу әҙәбиәте, сағыу балалар китаптары, янг-эдалт. Хатта һайлап алынған букинистика һөйөүселәр өсөн дә майҙансыҡ табыла!
Яҙыусылар өсөн эшлекле программа эшләй, унда халыҡ-ара хеҙмәттәшлек һәм заманса китап индустрияһын үҫтереү мәсьәләләре тикшерелә. Йәш яҙыусылар һәм шағирҙар өсөн дә, шулай уҡ абруйлы авторҙар өсөн дә әҙәби конкурстар үткәрелә.
Китап уҡыусыларҙы һәм тамашасыларҙы илдең алдынғы театрҙары режиссерҙарынан әҙәбиәт классиктары әҫәрҙәренең спектаклдәре, кино күрһәтеүҙәр һәм мауыҡтырғыс лекторийҙар көтә. Йәрминкәлә билдәле шәхестәр, авторҙар менән осрашыуҙар үткәрелә, ҡунаҡтар уларға һорауҙар бирә, һатып алынған китаптарына автограф ала ала.
Ашарға яратыусылар өсөн көндәр буйы гастрозона эшләй, унда башҡорт милли аш-һыуын тәмләп ҡарау мөмкинлеге бар.

# 31. 55°N55°E-ҡоро ерҙәге берҙән-бер нөктә

Донъяла киңлек һәм оҙонлоҡ 55 градус билдәһендә тап килгән дүрт нөктә генә бар. Уларҙың өсәүһе Тымыҡ, Атлантик һәм Һинд океандарында урынлашҡан. Ә дүртенсеһе, берҙән-бер ҡоро ерҙәгеһе-республиканың Кушнаренко районы Түбәнге Сәйет ауылында.

Ауылда был фактты билдәләүсе урын-уникаль координаталар геометрияһы 55°N55°E булған иҫтәлекле мачта бар. Мачтаны ҡуйыу идеяһы Росреестрҙың Башҡортостан буйынса идаралығына ҡарай. Өс метрлыҡ конструкция геодезия пункты сигналы кеүек күренә, нигеҙе мәрмәрҙән эшләнгән.

Янында ШОС һәм БРИКС халыҡ-ара альянсы илдәренең баш ҡалаларына тиклем йүнәлеш һәм алыҫлыҡ күрһәткесе ҡуйылған. Уның делегаттары 2015 йылда Өфөлә осрашты. Был күрһәткесте мачта барлыҡҡа килгәнгә тиклем Тере Журнал платформаһында «102» төбәк берләшмәһенең граждандлыҡ активистары - модераторҙары ҡуйған.

Шуныһы иғтибарға лайыҡ, республиканың «Рус география йәмғиәте» был урынды «Башҡорт донъяһы буйлап» тыуған яҡты өйрәнеү маршрутына индерҙе. Маршрут Башҡортостандың тағы ла дүрт «иң алыҫ» географик координатаһын үҙ эсенә ала: иң төньяғы-Яңауыл, көньяғы-Ейәнсура, көнбайышы-Баҡалы, көнсығышы-Учалы райондарында урынлашҡан. Маршруттың бөтә нөктәләрендә булған туристар ойошманан сертификат ала.

55°N55°E нөктәһендә мотлаҡ теләк теләргә кәрәк!

# 32. Өфөлә «1000 велосипедсы көнө»

Өфө велоинфраструктураны үҫтереү буйынса миллионлы ҡалалар араһында лидер булып тора. Республиканың баш ҡалаһы велосипед юлдары оҙонлоғо, уларҙың хәүефһеҙлеге һәм ҡаланың иң популяр урамдарында урынлашыуы менән айырылып тора.

Йыл һайын май аҙағында йәки июнь башында Өфөлә «1000 велосипедсы көнө» масштаблы спорт велоуҙышы үткәрелә. Унда ҡатнашыусылар һаны 26 меңдән ашыу кеше тәшкил итә! Статистика күрһәтеүенсә, велофестивалдә ҡатнашырға теләүселәр һаны йылдан-йыл арта ғына бара.

Проект етәксеһе, «БР велосипедсылар союзы» Төбәк Йәмәғәт Ойошмаһы рәйесе Егор Лукша билдәләүенсә, Өфөлә велосипед берләшмәһе ярайһы уҡ көслө, ә ҡала үҙе берҙәм велосипед ҡулсаһын булдырыуға әҙер. Бынан тыш, велосипедтың хәрәкәт итеү сараһы ғына түгел, ә донъяны үҙгәртеү сараһы булыуын билдәләй. Фестивалдең маҡсаты-яҡшыраҡ киләсәк версияһы мөмкинлеген күрһәтеү, велосипед хәрәкәте, спорт һәм сифат яғынан кешеләрҙе берләштереү өсөн майҙансыҡ булдырыу.

«1000 велосипедсы көнө» илдә ҡатнашыусылар һаны менән ҡалала йәшәгән һәм велосипедты хәрәкәт итеү ысулы итеп ҡулланған граждандар һаны нисбәте буйынса коммерцияға ҡарамаған иң ҙур спорт проекты булып тора. Велопроекттар грант һәм ирекмәндәр ярҙамында тормошҡа ашырыла.

Ике тәгәрмәсле транспортҡа ултырғанда, беҙ сәләмәт йәшәү рәүешен һаҡлап ҡына ҡалмайбыҙ, ә ҡалабыҙҙы, уның урамдарын ғәҙәти маршруттарҙы бөтөнләй икенсе төрлө ҡабул итәбеҙ. Беҙҙә ҡала мөхитенә яңыса ҡараш асыла.

«1000 велосипедсы көнө» теркәлеүҙән (сайтта алдан теркәлергә мөмкин) һәм ҡатнашыусыға бушлай шәхси номер алыуҙан башлана. Хәүефһеҙ хәрәкәтте тәьмин итеү маҡсатында велосипедсылар өсөн махсус рәүештә ҡаланың үҙәк урамдарын һәм ихаталарҙан сығыу урындарын ябалар. Старт иртәнсәк башлана. Маршрут ҡала советынан телеүҙәккә тиклем-яҡынса 10 саҡрым тәшкил итә.

Проектты ойоштороусылар велосипедсыларҙы сараларға ҡушылырға саҡыра. 2030 йылға велоуҙышты Калининградтан Камчаткаға тиклем үткәрергә тигән ҙур маҡсаттар планлаштырыла.

# 33. Башҡорт зубрҙары

15 мең йыл элек Башҡортостанда ысын зубрҙар йәшәгән! Был хайуандарҙың һүрәттәре Шүлгәнташ мәмерйәһе стеналарында бар. Шунығы ҡыҙыҡ, бөгөн дә республиканың Күгәрсен районы биләмәһендә матур һәм ғорур зубрҙар йәшәй.

2023 йылда «Мораҙым тарлауығы»  тәбиғәт ҡурсаулығынан алыҫ түгел, Ыҡ зоология заказнигы территорияһында тәүге зубрҙар сығарыла. Белоруссиянан май һәм декабрь айҙарында ике партия менән 18 хайуан килтерелә. Яйлап зубрҙар башҡорт ерҙәренә өйрәнәләр. Бер йылдан һуң беренсе зубр балаһы донъяға килә!

Зубрҙар тәбиғи мөхиттә йәшәй һәм парк территорияһында иркен йөрөй, уларҙы маяҡлы муйынсаҡтар һәм фототоҙаҡтар ярҙамында белгестәр күҙәтә. Хайуандар боронғо тыуған иленә яҡшы яраҡлаша, уңышлы ҡышлай һәм хәҙер популяцияһын арттыра. Ата хайуандар ике метрға етә һәм ауырлығы тоннанан ашыу. Инә хайуандар ҙурлығы буйынса ҡалыша. Зубрҙар уҫаҡ, ҡайын япраҡтары, үлән үҫемлектәре, имән сәтләүеге, ҡышҡы ваҡытта ылыҫлы ағастарҙың ботаҡтары, ағас ҡайыры менән туҡлана.

Зубрҙар тәбиғәттә йәшәүгә бик яҡшы яраҡлашҡан-кәүҙәләре ҙур булыуына ҡарамаҫтан, был затлы хайуандар йөҙөү һәләтенә эйә, һаҙлыҡтарҙан ҡурҡмай һәм текә битләүҙәрҙе үтеп сыға ала. Өҫтәүенә, зубрҙар бик аҡыллы. Хәүеф янағанда балаларын уртаға ҡалдырып, ҡаплап торалар.

Хәҙер донъяла ни бары 11 мең зубр ғына ҡалған.

Туристар был һирәк осраған, затлы һәм матур бизондар нәҫеленең вәкилдәрен «Мораҙым тарлауығы» тәбиғәт паркының демонстрацион вольерында күрә алалар.

# 34. Икенсе Баҡы, йәки Ишембайҙың «Ҡара алтыны»

Һуғыштан һуңғы осорҙа Башҡортостан СССР-ҙа нефть сығарыу буйынса Әзербайжандан ҡала икенсе урынды биләй. Бер быуат самаһы элек Башҡортостандың көньяғында, Ишембай ҡалаһы буласаҡ урында, «ҡара алтынды» разведкалау һәм сығарыу өсөн быраулау вышкаларын төҙөү һәм монтажлау буйынса ҙур, ауыр эш ҡайнай башлай.

1929 йылда белгестәр нефть ятҡылыҡтарын билдәләй һәм теркәй, был скважиналар быраулауға башланғыс һала. Тағы өс йыл үткәс, 1932 йылдың майында, 680 метр тәрәнлектән ҡырҡ метрлыҡ фонтан бәрелә! Ә Ишембай районы хәҙер «икенсе Баҡы» тигән ғорур исем ала.

Буласаҡ ҡалала ысын сәнәғәт тормошо ҡайнай башлай, ә урындағы инфраструктура һәм иҡтисад ҙур темптар менән үҫешә. 1300-гә яҡын эшсе, ҙур машина-трактор паркы, бер-нисә йөҙ эшсе йөк аттары-былар барыһы ла «ҡара алтын» сығарыу һәм эшкәртеү буйынса данлы тарихтың башы булып тора. Артабан бында «Өфө - Ишембай» тимер юлы һалына, ә республикала яйлап яңы ятҡылыҡтар асыла башлай, нефть эшкәртеү заводтары төҙөлә һәм әүҙем үҫешә.

Туймазы «ҡара алтын» ятҡылығы асыла: ул нефть запастары буйынса донъялағы иң ҙур биш ятҡылыҡ иҫәбенә инә!

Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Башҡортостан нефтенән караптар, танктар, самолеттар һәм автомобилдәр өсөн яғыулыҡ эшләгәндәр. Һуғыш осоронда сеймал табыу 4,5 миллион тоннаға етә, йәки Рәсәйҙә сығарылған нефттең 25 процентын тәшкил итә!

1945 йылда «Башнефть» предприятиеһы барлыҡҡа килә. Шул уҡ ваҡытта «Башнефтехимзаводы» берекмәһе ойошторола.

1948 йылда Өфө нефть университетына нигеҙ һалына.

Башҡортостан нефтселәре турбиналы быраулауҙы уйлап таба. Был ысул бөтә Рәсәй буйынса ҡулланыла башлай.

1952 йылда нефть һәм газ промыслалары ҡоролмаларын проектлау буйынса «Башнефтепроект» институты ойошторола.

1955 йылда республикала иң ҙур Арлан нефть ятҡылығы асыла.

Ҡасандыр нефть тарихының ҙур этабы башланған Ишембайға 2025 йылдың башында « Хеҙмәт батырлығы ҡалаһы» исеме бирелде!

# 35. Вертолет мәмерйәһе-һыу аҫты лабиринттары менән убылған соҡор

Әхмәр упҡынын вертолет бортынан күреп ҡалалар. Шул рәүешле спелеологтар тәүге тапҡыр карст мәмерйәһе барлығын белә һәм Вертолет мәмерйәһе тип атайҙар. Республикалағы иң оҙон гипс мәмерйәһе Башҡортостандың Ауырғазы районы Әхмәр ауылынан алыҫ түгел урынлашҡан.
Вертолет мәмерйәһе көңгөр ҡатламының асыҡ-һоро ҙур гипстарында барлыҡҡа килә. Мәмерйә оҙонлоғо яҡынса 100, киңлеге 40 метр булған ике төп ауыш галереянан башлана. Галереяларҙан ҡоро өҫкө һәм аҫҡы ҡаттарға тармаҡтар бара. Инеү урыны үҙе 30 метрҙан ашыу тәрәнлектәге һәм диаметры яҡынса 80 метрлы текә борттары булған йырынлы воронканан тора. Мәмерйәһенең оҙонлоғо ике километрҙан ашыу! Иҙәнендә сатнаған, төйөрлө балсыҡ ҡатламын күрергә мөмкин, унан һыу ағып төшә.
Мәмерйә эсендә ҡатмарлы, ҡулсалы, тупикка алып барыусы бик күп төрлө юлдар бар. Түбәһе һәм стеналары коррозия менән ҡапланған.
Спелеодайверҙар йәшел күл төбөндә ысын лабиринттар табып, 150 метр самаһы һыу аҫты юлдарын өйрәнәләр.
Упҡында һауа температураһы 6 градусҡа етә. Ҡышҡыһын иһә ер өҫтөндәге температура менән тап килә, бер аҙ тайпылыштар булыуы мөмкин.
Ҡышҡы ваҡытта Вертолет мәмерйәһендә бәҫте күрергә, боҙ кристалдары, сталагмиттар һәм сталактиттар менән һоҡланырға мөмкин. Экскурсияға сентябрҙән мартҡа тиклем барырға кәңәш ителә: яҙын мәмерйәне тулыһынса һыу баҫа, уның тәрәнлеге дүрт метрға етеүе мөмкин.
Аҡса түләп мәмерйәнең эсенә төшөргә мөмкин, унда баҫҡыс ҡуйылған.

## 36. Көньяҡ Уралда беренсе Воскресенск баҡыр иретеү заводы

Был архитектура ҡомартҡыһына өс йөҙ йыл элек нигеҙ һалынған. Ул республиканың Мәләүез районында, «Торатау» геопаркы биләмәһендә урынлашҡан.

Воскресенск баҡыр иретеү заводы Көньяҡ Уралда беренсе металлургия заводы булып тора. Шулай уҡ Ырымбур губернаһында беренсе шәхси завод тип иҫәпләнә. Табын ҡәлғәһе янынан аҡкан Воскресенка йылғаһы хөрмәтенә аталған баҡыр иретеү заводы 150 йыл эшләп, данлы һәм оҙайлы тарихҡа эйә.

Баҡыр иретеү заводына XVIII быуатта сембер сауҙагәре Иван Твердышев нигеҙ һала. Иретелгән баҡыр күләме бик ҙур була: Твердышев компанияһы һәм уның компаньоны Иван Мясников Рәсәй империяһының шәхси сәнәғәтселәре араһында беренсе урынды биләй. XVIII быуаттың икенсе яртыһында был заводта иретелгән баҡыр тәңкәләр эшләү өсөн Екатеринбург аҡса һуғыу йортона оҙатыла.

«Пугачев ихтилалы» ваҡытында Воскресенск баҡыр иретеү заводы бер ни тиклем ваҡытҡа баш күтәреүселәр үҙәгенә әйләнә. Хатта Емельян Пугачев үҙе завод сиркәүенә ғибәҙәт ҡылырға килгән тигән легенда ла  бар.  Крәҫтиәндәр һуғышы етәксеһе һәм уның кешеләре сиркәүҙән ер аҫты юлдары менән Воскресенсктан сығып китә.

Хужалары вафат булғандан һуң Мясниковтың ҡыҙы Дарья Пашкова заводты мираҫ итеп ала. Пашковтарҙың дворян нәҫеле заводҡа XX быуат башына тиклем хужа була.

1870 йылда предприятиены инглиз компанияһы «Прогден, Леббок һәм К» һатып ала. Яңы хужалар заводҡа рельс юлдарын һалдырта, шахта мейестәрен конуслы итеп үҙгәртә, пар машиналарын урынлаштыра һәм баҡыр сығарыуҙың дымлы ысулын эшләй. Әммә 1891 йылда завод нигеҙ һалыусыларҙың береһенең вариҫтарына ҡайта. Уны Мясниковтың ейәне Василий Пашков һатып ала! Воскресенск баҡыр иретеү заводы XX быуат башына тиклем эшен дауам итә. Предприятие килемһеҙ тип табылғандан һуң эшмәкәрлеген туҡтата. Яҡынса илле йыл дауамында завод корпустарында ваҡ йәки ваҡытлыса предприятиелар урынлаша һәм эшләй.

Үҙ эшмәкәрлеге осоронда Воскресенск баҡыр иретеү заводы 1,7 млн. бот (27,8 мең тонна) таҙа баҡыр етештерә.

2023 йылда Воскресенск баҡыр иретеү заводы ЮНЕСКО-ның бөтә донъя мираҫы объекттарының яҡынса исемлегенә индерелә.

Хәҙер бында «Воскресенск заводы» арт-үҙәге урынлашҡан. Сиркәү янында купель реконструкциялана, япма һәм кейем алмаштырыу бүлмәләре бар. Бина янында йәйәүлеләр өсөн юлдар төҙөлгән. Беседкалар, артистарҙың сығыштары өсөн амфитеатр һәм сәхнә комплексы бар. Туристар өсөн экскурсиялар үткәрелә.

# 37. Ҙур Таҙтүбә

Боронғо шихандарҙың тағы бер «туғаны» бар, унын тураһында күптәр белмәй. Республиканың Дыуан районы Таҙтүбә ауылы янында Оло Таҙтүбә тауы урынлашҡан. Тупраҡ кимәленән 100 метр бейеклектәге тау көмбәҙ формаһында, ә түбәһе платонан тора.
Ҙур Таҙтүбә Өфө платоһы һәм Йүрүҙән-Сылва уйпатлығы сигендә урынлашҡан. Геологик структуралар сиге шулай уҡ Рус платформаһы һәм Урал алды бөгөлө сиге булып тора.
Тауҙың килеп сығышы шихандарҙағы кеүек үк-300 миллион йыл элек Пермь диңгеҙе төбөндә урынлашҡан мәрйен рифы. Таҙтүбә атамаһы башҡорт телендә «Яланғас ҡалҡыулыҡ» тигәнде аңлата.
Тау көнбайыштан көнсығышҡа 2,5 км, көньяҡтан төньяҡҡа 1,8 км оҙонлоҡта, күп һанлы реликт һәм эндемик үҫемлектәргә бай, боронғо брахиопод ҡалдыҡтары һаҡланған. Ҙур Таҙтүбә-тәбиғәт ҡомартҡыһы. Һирәк осрай торған үҫемлектәр- себер флоксы һәм Крашенинников минуарцияһы. Һәүерташлы (известняк) ҡаялар бар.
Алыҫтан тауҙың иң түбәһендә изге Петр һәм Павел хөрмәтенә эшләнгән ағас сиркәүҙе күрергә мөмкин.

# 38. Ҡарғатуй (йәки «Ҡарға бутҡаһы») - боронғо башҡорт байрамы

Боронғо замандарҙа кешеләр яҙҙы ҡанаттары осонда ҡарғалар алып килә, тип иҫәпләгән. Был ышаныу башҡорт халҡын «Ҡарға бутҡаһы» байрамын үткәреүгә алып килгән.
Ул яҙғы баҫыу эштәре тамамланғас, апрель аҙағынан июнь уртаһына тиклем үткәрелә. Элек-электән балалар байрамды ҡаршылау өсөн матур кейемдәрен кейеп, шиғырҙар һәм йырҙар башҡарыр булғандар. Шул рәүешле улар бөтә күршеләрен «Ҡарғатуйға» саҡырған. Ауыл халҡы иң бейек ерҙә, йә аҡланда усаҡ яғып, ҙур ҡаҙанда бойҙай йәки арпа бутҡаһы бешерә. Бутҡа бешереү күңел асыуҙар, ярыштар, төрлө уйындар, ҡарға булып уйнауҙар, бейеүҙәр һәм халыҡ музыка ҡоралдарында-думбырала йәки ҡумыҙҙа уйнау менән оҙатыла. Ҡыуаҡтар һәм ағастарҙы көмөш beləҙектәр, муйынсаҡтар, яулыҡтар менән биҙәйҙәр, уларға төҫлө таҫмалар бәйләйҙәр, ә эргәһенә әсегән һөт ҡуялар.Ҡунаҡтар шулай уҡ сәй эсеү өсөн бал, сәк-сәк, бауырһаҡ, гөбәҙиә һәм башҡа милли ризыҡтар алып киләләр.
Бутҡаның бер өлөшөн халыҡҡа тыныслыҡ һәм яҡшы уңыш теләп, ергә һалалар. Икенсеһен ерҙәге йәнлектәрҙе туҡландырыу өсөн һыуға бирәләр. Ҡояшлы көндәре менән ҡыуандырып торһон һәм ямғырҙар ваҡытында башланһын өсөн өсөнсөһөн күк йөҙөнә бағышлайҙар. Яҙҙы алып килгәндәре өсөн рәхмәт йөҙөнән дүртенсе порцияны ҡарғаларға ҡалдыралар. Һуңынан бутҡаны бөтә йыйылған ауыл халҡына тараталар. Кешеләр таралышҡас, ҡарғалар ташҡа йәки түмһәккә ҡалдырылған ризыҡҡа ябырыла.
Хәҙерге көндә лә «Ҡарға бутҡаһын» үткәреү йолаһы һаҡланған. Республиканың төрлө райондарындағы ауылдарҙа, тәбиғәттә, мәҙәниәт һарайҙарында һәм мәҙәни үҙәктәрҙә байрам ителә.

# 39. Ҡымыҙ. Донъялағы беренсе ҡоро һөт етештереү

Республика элек-электән бейә һөтөнән эсемлек-кымыҙ әҙерләү менән дан тота. Бөйөк рус яҙыусы-классиктары - Лев Толстой, Марина Цветаева, Антон Чехов, Саша Черный-Башҡортостанға ҡымыҙ менән дауаланырға килгәне билдәле.
Ҡымыҙ аҡһымдарҙы һәм майҙарҙы үҙләштереү өсөн бик яҡшы сара булып тора. Ул ашҡаҙандың әселеген арттыра һәм аппетитты аса. Уның үҙенсәлектәре араһында шулай уҡ углевод алмашыныуын яҡшыртыу, токсиндар сығарыу һәм йоҡоно нормалләштереү бар.
Үҙ ваҡытында был файҙалы продуктты етештереүселәр ҡымыҙҙы һаҡлау ваҡытын оҙайтыу тураһында уйланған. Республиканың Баймаҡ районында ҡоро ҡымыҙ әҙерләү өсөн әсетелгән һөт эсемлеген сублимациялау ысулы уйлап табылды.
Бер-нисә йыл элек бында йылҡы һөтөн сублимациялау буйынса «Экопродукт» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте предприятиеһы эшләй башланы. Уның эш цехында тәүлегенә 800 литр сеймал эшкәртелә, һөҙөмтәлә 80 килограмм эшкәртелгән продукт алына. Артабан производство киңәйтелеп, 1200 литр ҡымыҙ эшкәртеү планлаштырыла.
Сублимациянан һуң файҙалы продукт үҙ үҙенсәлектәрен юғалтмай, витаминдар, микроэлементтар, хатта тәм һәм еҫ һаҡлана! Яңы һауылған йылҡы һөтөн пастеризациялайҙар, һыуыталар, уға әсеткес өҫтәйҙәр һәм болғаталар. Ә әҙер ҡымыҙҙы сублимациялау өсөн махсус ҡоролмаға тултыралар.

# 40. Лимон, банан, инжир һәм Өфө лимонарийы папайяһы

700 төрлө экзотик үҫемлек төрө, 1200 цитрус ағасы һәм хатта яңы өйләнешкәндәрҙең бүлмәһе-был ысын ожмах баҡсаһын үҙ күҙҙәрең менән күрергә мөмкин. Өфө лимонарийының ябыҡ теплицаһында йыл әйләнәһенә экскурсиялар үткәрелә.
Йәйгеһен бында субтропик климат хакимлыҡ итә, ә ҡышҡыһын, иң ҡаты һыуыҡтарҙа, температура +12-нән түбән төшмәй. Өфө лимонарийында лимон, мандарин, әфлисун һәм төрлө сортлы грейпфрут сығаралар, банан, папайя үҫтерәләр. 2024 йылда бында 1,8 килограмм ауырлыҡтағы лимон сортын сығаралар һәм уны «Салауат» тип атайҙар. Был сорттың емештәре лимонарийҙа иң эреләре!
Өфөлә лимон 35 йыл үҫтерелә инде. Ваҡытында ҡалаға 1500 Ташкент үҫентеһе килтерелә һәм улар лимондың яңы сорттарын сығарыу өсөн нигеҙ була. Шулай итеп, «Уралтау» һәм «Зилә» цитрон сорттары, шулай уҡ «Салауат», «Ләйсән» һәм «Урман» лимон сорттары селекция ҡаҙаныштарының Хөкүмәт реестрына индерелә.
Өфө лимонарийы баш ҡаланың популяр урыны булып китте. Йыл дауамында Рәсәйҙең төрлө мөйөштәренән 50 000 самаһы кеше был уникаль урынға килә. Мәңгелек йәй атмосфераһынан ләззәт алыу һәм олеандрҙар, цитрондар, лимондар, инжир, мушмула, кактустар һәм папайяға һоҡланыу өсөн 1 гектар майҙанлы был иҫ киткес баҡсаға мотлаҡ килергә кәрәк!
Өфө лимонарийы Менделеев урамы, 152/2 адресы буйынса урынлашҡан. Һәр дүшәмбе-санитар көн, шишәмбенән йәкшәмбегә тиклем эшләй, тәнәфес 13.00-14.00. Экскурсиялар түләүле.

# 41. Мәлидәк-ғаилә тау фестивале

Тау пейзаждарын яратыусыларҙы, шулай уҡ йүгереү ярыштарын һәм экстримды үҙ итеүселәрҙе йыл һайын Көньяҡ Уралдағы Белорет районында көтәләр. Августа бында «Malidak Ultra» ғаилә тау фестивале үтә. Унда өлкәндәр ҙә, балалар ҙа ҡатнаша ала. Спортсыларҙы һәм фестиваль ҡунаҡтарын Ирәкташ, Яланғас, Кирәл, Малина һәм башҡа тау түбәләре көтә. Йүгереүҙә ҡатнашырға, тау түбәһенә барып етергә һәм тәбиғәт матурлығына һоҡланырға, шулай уҡ кемпингта йәшәргә теләүселәр өсөн бында төрлө ҡатмарлылыҡтағы 16 дистанция ҡаралған. Дистанциялар 5 километрҙан 100 километрға тиклем барып етә. Был ҙур сараға теркәлергә һәм билет һатып алырға мөмкин. Әммә ярыштарға медицина рөхсәте һәм мотлаҡ һәр дистанция өсөн төрлө ҡорамалдар талап ителеүен иҫәпкә алырға кәрәк. Ярыштарҙа башланғыс кимәлдәге лә, шулай уҡ профессиональ спортсылар ҙа ярыша ала.
«Malidak Ultra» скандинав йөрөшөндә үҙеңде күрһәтеү, командалы ғаилә квесында ҡатнашыу, балаларҙы сәләмәт йәшәү рәүешенә ылыҡтырыу, командалы спорт төрҙәрендә үҙеңде һынап ҡарау, ысын марафондарҙы, төрлө ҡатмарлылыҡтағы дистанцияларҙы үтеү мөмкинлеге бирә.
Ойоштороусылар үҙҙәре сайтында билдәләүенсә, «Malidak Ultra» фестивалендә туризмды үҫтереү һәм спортты популярлаштырыу өсөн ҙур потенциал күрә. «Матур Урал тауҙары үҙ геройҙарына лайыҡ, ә беҙ һәр кемгә еңеүсе булырға мөмкинлек бирәбеҙ», - тип яҙа улар.
Шулай уҡ көйәрмән сифатында килергә лә мөмкин: тау фестивале ҡунаҡтары өсөн ғаилә походтары, оҫталыҡ дәрестәре, йога һәм концерт программаһы ойошторола. Фестивалдә палаткалы лагерь өсөн урын бүленә, түләүле һәм бушлай парковкалар бар, тиҫтәнән ашыу ресторан эшләй. Эсәр һыуҙы үҙең менән алып килергә кәңәш ителә.

# 42. Урал тауҙарының иң көньяҡ меңлеге-Мәсем-тау

Тауға менеүе еңел түгел, әммә ҡыҙыҡлы, оҙон маршруттарҙы яратыусылар өсөн Мәсемтау-ысын табыш. Ул Урал һыртының иң көньяҡ тауы. Республиканың Бөрйән районында урынлашҡан, районда иң бейек тау булып тора. Үҙенең исемен ҡасандыр «Урал батыр» эпосы персонажы булған Мәсем хан исеменән алған.
Мәсемтауҙың бейеклеге 1040 метр, Ҙур Көньяҡ Урал һуҡмағы маршрутына инә. Тауға барышлай һаҙлыҡлы аҡландар, бейек үләндәр, күп кенә шишмәләр осрай. Итәгендә эсәр һыулы шишмә бар. Тәбиғәт бик ҡырағай, ә маршрут әле саҡ популярлыҡ яулай башлаған. Урмандарында йыландар һәм айыуҙар йәшәй, был походҡа барғанда иҫәпкә алынырға тейеш.
Тауҙың түбәһенән бер-нисә ҡаяға сығыу юлы бар. Уларҙың береһенә тимер баҫҡыс буйлап менергә мөмкин. Тауҙа боронғо «Таш мәсет» һаҡланған, ул метр бейеклектәге стеналар менән уратып алынған. Тау түбәләренең береһендә ҡатын – ҡыҙҙар байрамдары үткәрелә, уны шунда уҡ танырға мөмкин, сөнки ул алһыу төҫтә. Исеме лә Ҡыҙлар-Таш тип атала. Тау башынан болондарға, имән һәм йүкә урмандарына матур күренеш асыла.
Өфөнән Мәсемтауға тиклем юл яҡынса 270 саҡрым тәшкил итә. Район үҙәге Иҫке Собханғолдан тауға иң яҡын урынлашҡан Кейекбай ауылына рейс автобусы йөрөй. Ауылдан һуҡмаҡ буйлап тауға тиклем 12 саҡрым атларға кәрәк.

## 43. «Олотау йыйыны» - мини-футбол фестивале

Ҡотой ауылы халҡы 2019 йылда тәү башлап мини-футбол буйынса турнир ойоштторҙо. Хәҙер унда йыл һайын республика райондарынан ғына түгел, илдең башҡа төбәктәренән дә ауыл командалары ҡатнаша!
Хәҙер «Олотау йыйыны» турниры күләмле фестиваль булып һанала. Ул июлдә үтә. Исеме башҡорт телендәге «йыйын» һүҙенән килеп сыҡҡан һәм «халыҡ байрамы» тип тәржемә ителә. Ә Олотау - Учалы районының Ҡотой ауылы янындағы тау. Әгәр ҙә кеше ниндәйҙер ауылдың вәкиле булып турнирҙа ҡатнашырға теләй икән, күрһәтелгән адрес буйынса теркәлгән (йәки тыуған) булырға тейеш. Уның ниндәй йәштә булыуы мөһим түгел.
Мини-футбол буйынса ауыл командалары ҙур аҡсалата приз, эксклюзив күсмә кубок һәм башҡорт тоҡомло ат өсөн көрәшә. Бөтәһе 40 команда ҡатнаша. Турнир ике этапта үткәрелә: төркөмдәрҙә һәм финал уйын. Командалар йәрәбә менән 10 төркөмгә (һәр берәһендә 4 команда) бүленә. Иң яҡшы 32 команда плей-оффтың 1/16 стадияһына сыға. Матчтар ике таймда үткәрелә.
Турнир Ҡотой ауылынан көрәш буйынса Рәсәйҙең беренсе спорт мастеры, дүрт тапҡыр республика чемпионы, Рәсәй чемпионатының көмөш призеры, бөтә Рәсәй ярыштарында күп тапҡыр еңеүсе Ғайсар Ғәлин иҫтәлегенә арналған. Ойоштороусылар билдәләүенсә, Ғайсар Ғәлин футбол яратҡан һәм һәр ваҡыт тыуған ауылына килеп, яҡташтары менән уйнарға ваҡыт тапҡан була.
Бында ҡунаҡтарҙы бик ихлас ҡаршылайҙар һәм улар өсөн әүҙем конкурстар, айырым ярыштар ойошторалар, шуның өсөн генә булһа ла, был күләмле спорт ярышында ҡатнашыу бик мөһим. Фестиваль ҡунаҡтары уктан атыу, көрәштең урындағы традицион төрөндә көрәшеү, тау йүгерешендә үҙен һынап ҡарау, ат сабыштарында, билбау көрәшендә, башҡорт биатлонында, армрестлингта, мас-рестлингта, сүкеш ырғытыуҙа, гер этәреүҙә, сәпкә һуғыу, ҡулсаға ырғытыу, тупты һуғыу буйынса ярыштарҙа ҡатнаша ала. Ә кис ҡунаҡтарҙы концерт һәм дискотека көтә.
2025 йылда бында шулай уҡ мини-футбол буйынса беренсе ҡатын-ҡыҙҙар турниры үтәсәк.

# 44. Мулдаҡкүлдең тоҙло һыуы һәм шифалы ләме

Республиканың Әбйәлил районы Башҡортостанда иң тоҙло сапропель күле менән дан тота. Был уникаль тәбиғәт ҡомартҡыһының ике исеме бар: Тоҙлокүл, һәм Мулдаҡкүл-яҡындағы Мулдаҡ тауы (оро,шеш) исеме буйынса. Сығышы буйынса Мулдаҡкүл карст күле. Ер аҫты шишмәләре һәм яуым-төшөмдән тулылана. Шулай уҡ күлде һаҡлау өсөн артезиан скважиналары быраулағандар. Улар көнбайыш ярҙа урынлашҡан, сөсө һыу сығанағы булып торалар. Күл овал формала, уның дөйөм майҙаны 8 км.2 тәшкил итә. Тәрәнлеге яҡынса 6 метр. Күлдә алабалыҡтар ғаиләһенә ҡараған пелядь балығы йәшәй, ул күлгә махсус үрсетеү өсөн ебәрелгән.
Мулдаҡкүлдең тоҙлолоғо Ҡара диңгеҙ һыуҙары концентрацияһына етә. Ғалимдар күл төбөндәге шифалы сапропелдең массаһы яҡынса миллион тонна, тип билдәләй. Сапропель күп быуаттар дауамында сөсө һыу төбөндә барлыҡҡа килгән ҡалын ҡатламлы ләмдән ғибарәт. Уның составында органик матдәләр, углеводтар һәм гумус бар. Сапропель үлгән үҫемлектәрҙән, тупраҡ серетмәһе өлөшсәләренән һәм тере организм ҡалдыҡтарынан, планктондан барлыҡҡа килә.
Тире ауырыуҙарынан ҡотолорға йәки быуындарҙы дауаларға теләүселәр мотлаҡ Мулдаҡкүлгә килә, сөнки тоҙло ләм шифалы һәм иммунитетты нығытыуға булышлыҡ итә. Шулай уҡ күл каяк һәм виндсерфинг һөйөүселәр өсөн дә уңайлы. Палатканы теләгән урынға ҡуйырға мөмкин. Шул уҡ ваҡытта күлдең ҡырағай булыуын, инфраструктураның һәм урмандың булмауын, ҡояштан һаҡланыу һәм сүп-сарҙы территориянан сығарыу тураһында хәстәрлек күрергә кәрәклеген иҫәпкә алырға кәрәк. Комфортлы ял яратыусылар өсөн «Горки» ҡунаҡханаһы эшләй. Бында номер бронләргә, прокатҡа велосипед алырға һәм экскурсияға заказ бирергә мөмкин.
Күлдән алыҫ түгел Мулдаҡтау тауы урынлашҡан. Актив туристар түбәне яулап, урындағы төп серҙе күрә ала. Ул «Давид йондоҙҙары»-өс 6 осло йондоҙҙар. Уларҙың барлыҡҡа килеүе тураһында был яҡтарҙа төрлө теориялар йөрөй: сит планетанан килеүселәрҙең сәләме тип тә, зенит-ракета полкы полигонынан ҡалған тип тә һөйләйҙәр.

# 45. Сусаҡтау-көс биреүсе тау

Әгәр турист Сусаҡтауға ялан аяҡ килеш күтәрелһә, тау уға көс бирә, тигән ышаныу бар.
Әлшәй районының Сурай ауылы янында урынлашҡан тауҙы урындағы халыҡ Пеләш тау тип атай. Унда «Ҡыҙыл китапҡа» ингән үҫемлектәр үҫә. Сусаҡтау башҡорт теленән руссаға тәржемә иткәндә «сопка» тигәнде аңлата. Республиканың баш ҡалаһы Өфөнән 127 саҡрым алыҫлыҡта урынлашҡан. Дөйөм майҙаны 116 гектар булған тау үлән үҫемлектәре менән ҡапланған. Абсолют бейеклеге 269 метр. Бында урман юҡ, әммә даланың матурлығы ла таң ҡалдыра: ландшафт үҙе республика өсөн һирәк осрай торған ҡомло далаларҙың петрофит участкаларына-ташлы урындарға эйә. Сусактау итәгендә Дим йылғаһы аға. Тауҙың түбәһе конус рәүешендә, текә, әммә күтәрелеп була.
Тауҙа һәм уның итәгендә 100-ҙән ашыу төр үҫемлек үҫә. Ҡыҙыл китапҡа индерелгән өлгөләр бар-ҡомло шиңмәҫгөл, селтәрле люцерна, дөйә ҡылғаны, эре тәңкәгөл, Ипполит кәмәяпрағы, шырт еҙүлән, моронло астрагал һәм башҡа һирәк үҫемлектәр.
Сәйәхәтсе-блогерҙар Сусактауға рәсми булмаған «Ҡыҙҙар күкрәге» исемен бирәләр. Әммә урындағы халыҡ тауҙы бер ҡасан да улай атамай.
Сусаҡтау түбәһенән күрше тауға, тағы бер тәбиғәт ҡомартҡыһы-Сатыртауға (башҡортса исеме тауҙың ҡырҡылған түбәһе арҡаһында бирелгән) күренеш асыла, ул Ҡыпсаҡ – Асҡар ауылы янында урынлашҡан.

# 46. Йәйәүлеләр һәм велотуристар өсөн «Урал барыҫы»

Республиканың Рус география йәмғиәтенең төбәк бүлексәһе 1000 метрҙан ашыу бейеклектәге ете тау түбәһен яулаған туристарҙы махсус жетон һәм сертификат менән бүләкләй! Проект «Урал барыҫы» тип атала. Үҙ көсөн һынап ҡарарға теләүселәр рәсми сайтта ғариза бирә ала.
«Урал барыҫы» ике этапта үтә. Беренсеһе «7 түбә» тип атала ла инде. Проекттың асылы-Ирәмәл, Арҡыры, Һибелгән, Яланғас, Күмәрҙәк, Ҡорташтау, Ҡушай, Мәсем-исемлектәге һигеҙ түбәне яулау. Уларҙың һәр береһенең бейеклеге 1000 метрҙан кәм түгел. Жетон алыу өсөн ете тауға менеү етә. Маршруттарҙың береһен-йә Арҡыры тауын, йә Ирәмәлде һайларға мөмкин. Исемлектәге башҡа түбәләргә менеү мотлаҡ.
Проекттың маҡсаты булып туристарҙың тәбиғәттең матурлығынан ләззәт алыуы, үҙҙәренең сыҙамлыҡтарын һынап ҡарау һәм иҫтәлекле урындар буйлап сәйәхәт итеүҙән онотолмаçлыҡ тәьçораттар алыуҙары тора. Кем ете түбәнең һәр береһендә булып, танылған урындарҙа фото-видео төшөрә һәм ойоштороусыларҙың сайтында материалдар беркетеп, форма тултыра, шуны махсус жетон көтә.
Маршруттың үҙенсәлеге шунда: түбәләр араһында йәйәүлеләр генә түгел, велотуристар ҙа йөрөй ала. Ойоштороусылар карта әҙерләй, унда йәшел төç менән түбәләр араһындағы хәрәкәт һыҙыҡтары, ә ҡыҙыл менән-ташлы, үтеүе ауыр урындар билдәләнгән.
Икенсе этапты ете түбәне үтеүҙә айырма билдәһе-жетон алғандар үтә ала. Был этап «Ҙур Көньяҡ Урал һуҡмағы». Маршрут биш участканан тора, уларҙы теләһә ниндәй тәртиптә һәм йүнәлештә үтергә мөмкин. Бында төп ҡағиҙә- участкаларҙы бүлергә ярамай: маршрутты бер походта үтергә кәрәк. Юлдың дөйөм оҙонлоғо һоҡландыра: 150-180 километр! Бында туристар Көньяҡ Уралдың иң бейек түбәләрен күрәсәк, Белорет районы биләмәһендә генә түгел, Силәбе өлкәһендә лә буласаҡ. Бөтә биш участканы үткән турист «Урал барыҫы» фирма күкрәк билдәһен ала.

# 47. 25-се Чапаев дивизияһының йорт-музейы

Өфө районының боронғо Ҡыҙыл Яр ауылында шуныһы иғтибарға лайыҡ: бында Граждандар һуғышы комдивы Василий Чапаевтың колчаковсылар менән алышы ваҡиғаларына арналған музей урынлашҡан һәм әле лә эшләй. Тап ошонда чапаевсылар аҡ гвардиясылар менән хәл иткес алыш өсөн Ағиҙел йылғаһы аша сыға.
25-се Чапаев дивизияһының йорт-музейы-илдең тарихи үткәне атмосфераһының ысын хазинаһы. Йорт үҙе «ҡыҙылдар» менән «аҡтар» һуғышы ваҡиғаларына тиклем төҙөлгән; 1880 йылдан башлап унда урындағы рухани Федор Бельский йәшәгән. Өфө операцияһы ваҡытында бында Чапаев дивизияһының штабы һәм ялан лазареты йәйелдерелә.
Ҡыҙыл Яр ауылы янында легендар алыш була: чапаевсылар плацдармды баҫып ала, авиация ярҙамында аҡтарҙың һөжүменән ҡаса. Тап бында Чапаев яралана һәм Көнсығыш фронттың Көньяҡ ғәскәрҙәре төркөмө командующийы Михаил Фрунзе контузия ала.
Музей 1940 йылда тарих уҡытыусыһы Василий Горбунов инициативаһы буйынса үҙ ишектәрен аса. Йортта дүрт зал бар. Ҡыҙыл Яр һәм уның тирә-яғы ерҙәре музейға ғәйәт ҙур экспозиция булдырырға һәм заман рухын сағылдырырға мөмкинлек бирә. Бында республикала йәшәгән удел крәҫтиәндәренең ике йөҙгә яҡын ҡоралы, һигеҙ йөҙ берәмек көнкүреш әйберҙәре һәм кейемдәре, шулай уҡ шул осорҙағы фотоһүрәттәр һәм документтар күрһәтелгән. XIX быуат аҙағы-XX быуат башындағы бүлмәләрҙең интерьерын тергеҙә алғандар, ул крәҫтиән көнкүрешен һүрәтләй.
Музей янында Василий Чапаевҡа һәйкәл ҡуйылған. Ҡунаҡтар ихатаһында Михаил Фрунзе һәйкәле «ҡаршылай». Ағиҙел буйында, кисеү урынында, Чапаев уҡсылар дивизияһы һәйкәлен күрергә мөмкин.
Ҡыҙыл Яр ауылында музей менән бер рәттән башҡа тарихи мираҫ урындары ла бар. Бында Рус тарихи – мәҙәни үҙәге урынлашҡан. Ауыл ҡунаҡтарына ҡарарға нимәлер бар!

# 48. Юлдыбай ауылы-республикала иң боронғоһо

Яҡынса 818 йәш – республикалағы иң ҙур ауылдарҙың береһе-Йылайыр районындағы Юлдыбай ауылының йәше шулай.
Тарихи яҡтан Юлдыбай ауылы боронғо транспорт артериялары киҫешкән урында-Һаҡмар йылғаһының үрге ағымында һәм Ҡәнифә юлы (каруан юлының төньяҡ тармаҡтарының береһе, Бөйөк ебәк юлының бер өлөшө) янында урынлашҡан. Шәжәрә һәм легендалар мәғлүмәттәренән күренеүенсә, XV быуатта хәҙерге ауыл урынында башҡорт ултырағы булған.
1963 йылда тарих фәндәре кандидаты, археолог М.Садыҡова ауыл биләмәһендә Урта быуат ҡурғандарын өйрәнә, уларҙың йәше XIII быуатҡа ҡарай. Ике таш ҡурғанда ҡалыптарҙа төньяҡҡа баш менән һалынған ҡәберлектәр, тимер бысаҡтар, быяла муйынсаҡтар, көмөш көҙгөләр, тотҡалы суйын һауыт һәм XIII-XIV быуаттарға ҡараған башҡа әйберҙәр табыла.
Юлдыбайға килгәс, тыуған яҡты өйрәнеү музейына мотлаҡ күҙ һалырға кәрәк. Ул үҙенең эшен урындағы мәҙәниәт йортонда алып бара. Экспонаттар араһында ҡыҙыҡлы артефакттар осрай. Бында ошо ауылда тыуған, Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған хәрби осоусыһы, авиация генерал-майоры Виктор Поповтың шлемы һаҡлана. 1883 йылда кейәүгә сыҡҡас, Юлдыбайға күсеп килгән йәш килендең боронғо күлдәге һаҡланған. Баш биҙәүестәре, камзул, күкрәк кейеме, күндән нәҙек итеп эшләнгән традицион аяҡ кейеме-ситек һәм тарихтың ҡабатланмаҫ рухын сағылдырған башҡа әйберҙәр бар.
Мәҙәниәт йортонан тыш, ауылда мәсет, Сонтонғаш ҡаяһы, обелиск һәм Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында һәләк булған яугир-яҡташтарға һәйкәл бар.
Юлдыбай республиканың баш ҡалаһы Өфөнән 460 километр алыҫлыҡта урынлашҡан.

# 49. 300 йәшлек тал

Ә һеҙ "әүлиәнең" кем икәнен беләһегеҙме? Боронғо замандарҙа уҡ, башҡорт халҡы ышаныуҙары буйынса, айырым энергетикалы кешеләр булған. Был кешеләргә төрлө ауырыуҙарҙан һәм зәхмәттәрҙән дауалау мөмкинлеге бирелә. Улар алдан күрә белеү һәләтенә эйә була һәм үҙ халҡын тәбиғәт һәләкәттәре тураһында иҫкәртә ала. Төрлө катаклизмдарҙан нисек һаҡланырға кәрәклеген белә. Башҡорттар уларҙы "әүлиә" тип атай.
Республиканың Бишбүләк районы Яңы Биктәш ауылында "Әүлиә ҡәберҙәре" урынлашҡан изге урын бар. Ҡәберҙәр ҡалҡыулыҡта урынлашҡан. Бында урындағы халыҡ элек-электән доға ҡылырға күтәрелгән. Ҡоролоҡ ваҡытында ямғыр һорағандар, теләктәр әйткәндәр. Ауыл эргәһендә ошондай ете ҡәберлек һәм һәр береһенең шишмәһе бар тип иҫәпләнә!
Бер ҡалҡыулыҡ итәгендә шифалы һыу менән шишмә бар. Һәм бында диаметры 2,55 метрға еткән мөһабәт һәм ныҡлы тал үҫә! Төрлө версиялар буйынса, ағасҡа 150 йылдан кәм түгел. Ҡайһы бер сығанаҡтарҙа 300 йәш тип күрһәтелә!
Был ағас тәбиғәт күренештәренән ҡурҡмаған кешеләр тураһында легенданы раҫлаусы символ кеүек. Талдың тамырҙары ергә тәрән китеп, ныҡ берегеп үҫкән. Ағасҡа дауылдар ҙа, яҙын иреп аҡҡан һыуҙар ҙа, эҫе ҡояш та ҡурҡыныс түгел кеүек. Ололар талдың һауа торошона йоғонто яһай алыуына ышанған.
Был матур урында шишмә һыуын эсеп, өс быуат буйына һаҡланып ҡалған уникаль ағас күләгәһендә ял итеүе рәхәт.

# 50. Айыу ҡаяһы, йәки Етеҡая

Етеҡая түбәһенән диңгеҙ кеүек йәйелеп ятҡан Павловка һыуһаҡлағысына - ғәйәт ҙур һыу ятҡылығына иҫ киткес күренеш асыла. 150 саҡрым оҙонлоҡтағы һыуһаҡлағыстың башы тап ошонда, Ҡариҙел районында башлана.
Алтмыш йылдан ашыу элек төҙөлгән Павловка һыуһаҡлағысы Өфө платоһының карстланған ерҙәрендә урынлашҡан Советтар Союзының беренсе ҙур һыу ятҡылығы була.
Бындағы матур тәбиғәт һәм саф һауа Рәсәйҙең төрлө ҡалаларынан туристарҙы йәлеп итә. Тәбиғәттең иҫтәлекле урындары ла күп.
Ете ҡая, Теләк ҡаяһы, Айыу ҡаяһы - былар барыһы ла Яңы Йәнсәйет ауылы янында урынлашҡан бер - нисә ҡаяның атамалары. Тау башындағы ете ҡаяны һыуһаҡлағыстан уҡ яҡшы күрергә мөмкин. Кешеләр Айыу ҡаяһына тотош ғаиләләре менән килә. Улар башҡорт тәбиғәтенең матурлығына һоҡлана, ҡая өҫтөндә ҡалҡып торған таштарҙа иҫтәлекле фотосессия ойоштора, һәм, әлбиттә, теләктәр теләй. (Теләк ҡаяһы атамаһы шунан килеп сыҡҡан).
Урындағы халыҡ билдәләүенсә, Етеҡая тураһында белгәс тә барлыҡҡа килгән беренсе теләк - бында килеү. Икенсеһе-ҡаяла мөмкин тиклем күберәк ваҡыт үткәреү.

Дополнительные тексты

## 51. Ахун һынташтары-боронғо обсерватория һәм көс алыу урыны

Был мегалит ҡомартҡы яҡынса өс мең йыл элек барлыҡҡа килгән һәм уны инглиз Стоунхенджы менән сағыштыралар. Боронғо обсерватория, шаман йолалары урыны... Бында көс табыу йәки теләктәр теләү өсөн киләләр.
Ахун һынташтары Республиканың Учалы районында, Ахун ауылынан бер саҡрым алыҫлыҡта урынлашҡан. Улар оҙонса, һырланған, дүрт ҡырлы вертикаль таштар.
Һынташтар ағас ҡойма менән уратып алынған үҙәндә урынлашҡан. Ике ҙур мегалит үҙәктә, бер-береһенән 15 метр алыҫлыҡта торалар. Артабан, уларҙан биш метр алыҫлыҡта, тағы ла һигеҙ торататаш бар. 170 метрҙа ҙур булмаған һын һәм 80 метр алыҫлыҡта тағы ла бер нисә бәләкәй таш тора. Был таш һындарҙың йәше төрлө: ҙурҙары башҡаларҙан күпкә алдараҡ ҡуйылған. Шулай уҡ бында һигеҙ соҡор бар: ҡасандыр һынташтар күберәк булған тип фараз ителә.
Ҡайһы бер тикшеренеүселәр Ахун һынташтарын Көньяҡ Урал территорияһындағы ”Ҡалалар иленә” ҡарай, тип иҫәпләй. Унда урта бронза дәүерендәге боронғо ҡалалар (Арҡайым) табылған. Был осраҡлы түгел: үҙәндә ҡаҙыныу эштәре алып барған саҡта археологтар йәшмә әйберҙәр, таш ҡоралдар, керамик материалдар таба. Ахун меңгерҙәре астрономик обсерватория сифатында ҡулланылған. Бында боронғо кешеләр ҡояшты, айҙы һәм йондоҙҙарҙы күҙәтә алған, сөнки үҙәк таштан төшкән күләгә датаны һәм ваҡытты билдәләгән. Мегалит комплексын билдәләү Стоунхенджда ҡулланылған техникаға оҡшаш тип һанала.
Был урын изге тип иҫәпләнә һәм теләк теләүсегә көс бирә тигән фараз йәшәй. Ахун янында туристар өсөн ял йорто бар. Боронғо ҡомартҡынан алыҫ түгел автомобиль парковкаһы төҙөлә. Ял итеү өсөн беседкалар, бәҙрәфтәр бар.

# 52. Николо-Березовка-сауҙагәрҙәрҙең йорттары һәм легендалары булған боронғо ауыл

Был тарихи ауыл Өфөнән сирек быуатҡа тиерлек олораҡ. Николо-Березовка бөгөн үҙенең ҙур тарихы менән ғорурлана ала. Ауылға 1550 йылда нигеҙ һалына. Хәҙер тулыһынса тергеҙелгән һәм төҙөкләндерелгән. Сауҙагәрҙәрҙең боронғо йорттары, «Никола ғибәҙәтханаһы» тарихи-архитектура комплексы, юлдары ҡырсынташ түшәлгән урамдар ҡунаҡтарҙы үткәндәрҙең шаршауын асыу һәм урындың онотолмаҫлыҡ атмосфераһын еткереү өсөн көтә.
Николо-Березовка үҙенең исемен Строганов фамилиялы сауҙагәрҙәрҙең йылға буйлап йөҙөп барғанда караптары көтмәгәндә туҡтап, урынынан ҡуҙғала алмағандан һуң ала. Буласаҡ нигеҙ һалыусылар ярға сыға һәм ҡайында Николай Чудотворец иконаһын күрә. Ошонан бында Камалағы иң ҙур порт һәм Кама буйында икмәктең баш ҡалаһы булып һаналған Троица-Никольский ғибәҙәтханаһын төҙөү тарихы башлана.
Революцияға тиклем үк ауылға ике тапҡыр Николай II-нең балдыҙы, кенәз ҡатын Елизавета Федоровна килә. Һуңынан ул Рус православие сиркәүе тарафынан изге шәһиттәр рәтенә тиңләштерелә. Еңеү паркында, 2000-се йылдар башында, ҡасандыр емерелгән сиркәүҙе яңынан төҙөйҙәр һәм уны Елизавета хазинаһы тип атайҙар.
XX быуатта был урында бик әүҙем һыуһаҡлағыс төҙөлә. Ауыл халҡын күсерә башлайҙар, йорттар ташландыҡ хәлдә ҡала. Әммә ауылды һыу баҫмай. Хәҙер ҡайһы бер буш ҡалған сауҙагәр йорттары яңы һулыш ала: тергеҙелгән биналарҙа ҡунаҡханалар, ресторан, балыҡ хужалығы һәм музей урынлашҡан. Башҡортостан ҡалаларын үҫтереү институты, «Апрель», «Яңы Ер», ауыл хакимиәте һәм халҡы Николо-Березовканың хәҙерге йөҙөн һәм уның туризм өсөн уңайлылығын үҫтереүгә үҙ өлөшөн индерҙе.
Оло Сауҙагәр урамындағы (хәҙерге Ленин) күпер буйлап йәйәү йөрөү бик күңелле. Ә һаҡланған йорттарҙа объекттың тарихи фотоһүрәттәре һәм мәҙәни мираҫ ҡомартҡыһы тарихы яҙылған мәғлүмәт таҡталарын табырға мөмкин. Ауылда саралар өсөн павильон, фольклор байрамдары үткәрелгән ваҡиғалар майҙансығы һәм йәйәүлеләр өсөн һуҡмаҡлы, бәүелсәк һәм пирс менән төҙөкләндерелгән яр буйы бар.
Николо-Березовка ауылы Удмуртия сигендә, Башҡортостандың Краснокама районында урынлашҡан.